*Тик әҙәмдең башына бәлә килһә генә*
*Үкенеп ялбаралыр Тәңреһенә.*
*Әгәр уны мәрхәмәткә күмһә Алла,*
*Үкенеүҙәр, ялбарыуҙар онотола.*
*Әйт ундайға: "Аҙашыуың тиҙ беленер,*
*Сөнки тамуҡ әһелен һин береһелер".*

**Мәүлит ЯМАЛЕТДИН**
**"Ҡөрьән"дең шиғри тәржемәһе.**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

31 МАРТ - 6 АПРЕЛЬ (БУРАНАЙ-АЛАҒАРАЙ) 2007 ЙЫЛ

№13 (223)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Рухиәт һаҡсылары** һынау тотто



4

**Күҙҙәреңдең нуры** йөрәгемдә ҡалды...



6

**Беҙ һауған һөттөң ҡаймағын...** башҡалар ашаған икән дә



8-9

**Бала алдыҡ та...** аҡсалы булдыҡмы?



13

**ТВ ПРОГРАММАҺЫ**

14-15


450
1557–2007

*"Башҡорт халыҡ йырҙарының күбеһе моңло һәм һағышлы; башҡорттарҙа композиторҙар көнләшерлек гәжәп көйҙәр бик күп".*

**Р.Г. Игнатьев.**

*"Ниндәй оһолло, сос, зирәк халыҡ был! Башҡорттар бер ваҡытта ла яҙа атмай".*

**М.В. Авдеев.**



Сибай командаһы

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# Мөғжизә был "Шаяниум" –

## отҡорҙарҙы асыр шаян уйын

**2003 йылда баш ҡала тарихында тәүге тапҡыр башҡорт балалары өсөн КВН форматындағы "Шаяниум" шаяндар һәм отҡорҙар фестивале булдырылғайны. Быйыл 19-23 мартта өфөләр "Шаяниум" исемле мөғжизәне бишенсе тапҡыр тамаша ҡылды.**

✓ Беренсе уйында ни бары дүрт команда ҡатнашһа, был юлы иһә 21(!) команда сәхнәгә күтәрелде. Ағымдағы уҡыу йылында башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ республиканың бар мәктәптәрендә уҡытыла башлауы һөҙөмтәһе булды инде был. Элек отҡорҙар бәйгеһендә тик башҡорт гимназия-лицейҙары командалары ғына көс һынашһа, был юлы иһә рус мәктәптәренән килгән балалар ҙа башҡортсалап майҙан тоторға батырсылыҡ итте. Әлегә телде насар белеү, "Шаяниум"да ҡатнашыу тәжрибәһе булмау сәбәпле, 1-се, 4-се, 10-сы, 12-се, 46-сы мәктәп командалары сығыштары әллә ни сағыу булманы булыуға. Ә шулай ҙа башланғыс бар - шуныһы ҡыуандыра.

Бәйгенең һайлап алыу турҙары Комаров исемендәге Балалар ижады йортонда уҙҙы. Һайлап алыу турының жюриһына журналист Вилнур Хәсәнов, йырсылар Фәнис Солтанғолов менән Заһит Ҡунафин (МС-Баш) һәм КВН-сы Алмир Мөхәмәдйәров саҡырылғайны. Масляковтар династияһын дауам итеүселәрҙең башҡорттар араһында ла барлығын инде бишенсе йыл иҫбатлаусы "Шаяниум"дың алыштырғыһыҙ алып барыусыһы Фәнзил Әхмәтшин да үҙ урынында ҡалғайны.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

***✓ Тиҙлек заманында йәшәү бигерәк тә башҡорттарға ҡыйынырак. Ни өсөн тигәндә, уларҙың менталитеты ҡала мәҙәниәтен бик ауыр үҙләштерә. Башҡорт тәбиғәт балаһы, яй хәрәкәтлә. Заман иһә үтә йылғыр булыуҙы талап итә.***

*ИШАРА*

# ҠАЛА ҮҘГӘРТЕҮГӘ ҮҘГӘРТТЕ,

## әммә барыбер оялсанмын

**Башҡорт менталитеты тураһында яҙырға ниәт иткәс, бер хәл иҫкә килеп төштө. Юғары уҡыу йортонда уҡыған осорҙа студенттар араһында бер тикшереү үткәрергә тура килгәйне. "Ниндәй характер үҙенсәлеге һиңә уңыш ҡаҙанырға ҡамасаулай?"- тигән һорауға ике йөҙҙән ашыу кеше яуап бирҙе. Һуңынан, ҡағыҙҙарҙы йыйып алып, яуаптарҙы уҡығас, сәстәрем үрә торғаны иҫемдә. Сөнки респонденттарҙың илле проценты тиерлек бер үк һүҙҙе ҡабатлап яҙған: "Миңә теге йәки был ниәттәремде тормошҡа ашырырға... ялҡаулыҡ ҡамасаулай". Ысын мәғәнәһендә оло тетрәнеү булды был минең өсөн. Ғәрләнеү, оялыу, аптырау хистәрен бер юлы кисерҙем. Икенсе урында оялсанлыҡ, баҙнатһыҙлыҡ кеүек характер үҙенсәлектәре килә ине: "Ҡайһы бер ниәттәрем баҙнатһыҙлығым арҡаһында килеп сыҡмай". Өсөнсө урынды үҙ-үҙеңә ышанмау кеүек характер үҙенсәлеге алды: "Күмәк кеше араһында фекеремде ҡыҫҡырып әйтергә тартынам, берәй нәмә эшләйем тиһәм, килеп сыҡмаҫ, тип ҡурҡам".**

**Оялыу һәм үҙ көсөңә ышанмау кеүек характер үҙенсәлеген аңлап та, аңлатып та булһа, ялҡаулыҡ тигән яуапты рухым менән ҡабул итә алманым да ҡуйҙым. Һуңынан, студенттарҙың ғилми конференцияһында тикшереүҙәрҙең һө-ҙөмтәһен иғлан иткәс, бөтәһе лә беренсе урынды алған яуапты ишетеп, телһеҙ ҡалды, ләкин берәү ҙә уны инкар итергә көс тапманы. Оялып ултырҙылармы, әллә һөҙөмтә менән килештеләрме, аңламаҫһың. Ошо хәл йылдар үткәс тә, һаман күңелемдә өйкәй. Бәлки, алда атап үтелгән "үҙенсәлектәр" миндә лә ниндәйҙер кимәлдә барҙыр, тигән уйҙарҙы бар көсөмә ҡыуып ебәрергә тырышам...**

**Кем һин, бөгөнгө башҡорт? Заман үҙгәртә алдымы һине, юҡмы? Ниндәй характер үҙенсәлектәренә эйәһең һин бөгөн? Ошо һорауҙар менән йәштәргә тағы ла мөрәжәғәт итергә булдым. Сөнки тап йәштәрҙең фекере был һорауҙарға яуап табырға ярҙам итер кеүек ине. Яуаптар бына былай булды:**



**Әлфирә ҠАҺАРМАНОВА:**

- Элек ауыҙ асып һүҙ әйтергә лә ҡурҡа инем. Әллә ҡалала оҙаҡ ҡына йәшәп алыуым булышлыҡ итте быға, әллә быуыным нығынды - ул оялсанлығым ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы. Ниндәймен икән мин хәҙер? Батыр, ҡыйыу, ғорур һәм... барыбер эстән ниндәйҙер үтә баҫалҡы, баҙнатһыҙ. Ниңә шулайҙыр, аңламайым. Ҡайһы саҡ сатнатып берәй нәмә әйтеп, йә эшләп торам, үҙем иһә эске кисерәнештән бөгөлөп барғандаймын. Тиҫкәрелек тә юҡ түгел. Хәйер, был холҡом ҡайһы саҡ миңә ярҙам итеп тә ебәрә. Мәҫәлән, берәй эшем килеп сыҡмаһа, тешемде ҡыҫып, сәм менән яңынан башлайым. Шулай уҡ самаһыҙ ғорур түгелме икән беҙ? Ҡайһы саҡ аҙ ғына булһа ла һығылмалыраҡ булһаҡ ине.

**Сәлимә ЙОСОПОВА:**

- Мин электән үтә ҡыйыу, хатта ҡыҙыу ҡанлы булдым. Әсәйем гелән генә мине: "Күҙең сығып бара. Оят та юҡ һиндә, иман да!"- тип әрләй башлаһа, бик аптырай торғайным. Нисек инде, иманым юҡ? Ҡыйыулыҡҡа уның ниндәй ҡыҫылышы бар? Эйе, уйлағанымды әйтеп тә, эшләп тә барам, уҫалмын да. Тик был боҙоҡлоҡҡа инәме ни? Минеңсә, баланы улайтып баҫыу күрәләтә уның рухын һындырыу була. Бәлки, үтә ҡаты тәрбиә ҡанундары башҡорт-то тыумыштан уҡ баҫалҡы, оялсан яһайҙыр? Бөгөнгө заманда мәмәй булып ҡара! Эш хатта ауылда йәки ҡалала йәшәүҙә генә лә түгел. Хәҙер ауылда ла ундайҙарға көн бөттө: кемеһе эсеп, кешелеген юғалтҡан, кемеһе ни ғаилә ҡора алмай, ни эшкә урынлаша алмай, эт типкеһендә йөрөй... Улар беҙҙең башҡорттарға хас "тәрбиә" алған, күрәһең: алға ынтылма, тик кенә ултыр - оят була, кеше һүҙенә ҡыҫылма... Һуңынан ундай балаларҙың зыянын атаәсә үҙе генә күрһә, бер хәл. Был бит милләттең артабанғы үҫешенә ҡамасаулыҡ яһай. Ундай тәрбиә алған миңрәү милләт бер нәмәгә лә һәләтһеҙ була түгелме? Ҡаты тыйыуҙарҙан азат халыҡ ҡына йәшәү көсөнә эйә, минеңсә. Шуға күрә милләттең тамырына ата-әсәләр балта сапмаһын ине, тигән теләктәмен.

**Айрат ЮЛДАШЕВ:**

- Бөгөнгө башҡорт бар нәмәгә битараф һымаҡ. Быны мин үҙемдән дә сығып әйтәм. Донъяла нимә бара, кем ни эшләй - бер ни ҡыҙыҡһындырмай. Нимәнән килә икән ул, аңламайым. Балам әсәһе ыңғайына татарса һөйләшеп йөрөй, башҡорт телен белмәй ҙә, өйрәнмәй ҙә. Шуны күрә тороп, мин бер ни эшләй ҙә алмайым, дөрөҫөрәге, бер ни ҙә эшләгем килмәй. Ҡурам, һыҙланам, ләкин хәлде төҙәтергә үҙемдә көс тапмайым. Әйтерһең дә, миндәге бер мөһим үҙәкте һуғып һындырғандар. Рух тип аталамы икән ул? Икенсенән, үҙемдә һөнәрем буйынса юғарыға үрләрлек әллә күпме көс тоям. Әммә мин бер ни эшләмәйем. Сөнки принципиаль рәүештә уның кәрәклеген күрмәйем. Ҡалаға күсеп килеү менән, дәртем һүнде. Мегаполис шарттарында үҙеңде, йәғни башҡортлоғоңдо, һаҡлап булмайҙыр ул. Ниңә тип уйлайһығыҙмы? Ҡалала милләт, халыҡ түгел, масса, кешеләр ағымы йәшәй. Йәки ҡала кешеләрен үҙҙәрен бер милләт итеп ҡарарға була - төҫһеҙ, үҙенсәлекһеҙ, бер ҡалыпҡа тиң...

**Римма ФӘТИХОВА, Башҡорт дәүләт педагогия университетының психология факультеты деканы, психология фәндәре докторы, профессор:**

- Беҙҙең ил ун - ун биш йыл эсендә генә бик күп үҙгәрештәр кисерҙе. Был үҙгәрештәр кешеләргә йоғонто яһамай ҡалманы, әлбиттә. Дөйөм мәҙәниәт бөтөнләй икенсе, күңелгә ятышлыҙ кеше йәшәйешенең, образыныӊ ҡалыбын тәҡдим итә: тәкәббер, уңышлы, көслө, бары тик үҙенең көсөнә ышанған һәм үҙен генә беренсе урынға ҡуйған шәхес. Бөгөнгө көндә һинең рухыңа, тәбиғәтеңә тап килмәгән был "имидж" көсләп тигәндәй тағыла.

Беҙҙең психика иҫ киткес ҡыҫҡа арауыҡ эсендә бик күп ауыр үҙгәрештәр кисерҙе. Әлбиттә, эске рух, милләтте милләт иткән менталитет ҡаҡшамай ҡалманы. Рухи ҡиблаһынан яҙған милләт бушап, ҡотһоҙланып ҡалған күңелен нәмә менәндер тултырырға ашыҡты.

Заман менән бер ҡатар атлаған башҡорт милләте вәкиленең дөйөм портретын һүрәтләгәндә, тәү сиратта, белемгә ынтылыу кеүек характер үҙенсәлеген билдәләп үткем килә. Хәйер, бөгөн генә түгел, борон-борондан башҡорттар белемгә ынтылған халыҡ булған. Шулай уҡ, нисек кенә булмаһын, бөгөнгө башҡорт йәштәре үҙ һаулығын хәстәрләй. Физик яҡтан көслө, сыҙамлы ата-бабаларының ҡаны аҡҡан халыҡ башҡа төрлө йәшәй алмай, әлбиттә.

Бөгөнгө ҡалала йәшәү тиҙлеге шул тиклем юғары. Тиҙлек заманында йәшәү, минеңсә, бигерәк тә башҡорттарға ҡыйынырак. Ни өсөн тигәндә, уларҙың менталитеты ҡала мәҙәниәтен бик ауыр үҙләштерә. Башҡорт, тәбиғәт балаһы, яй хәрәкәтлә. Заман иһә үтә йылғыр булыуҙы талап итә. Ошо үҙенсәлектәр беҙҙә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, юҡ. Ирек һөйөүсәнлек кеүек характер һыҙаты ла ҡайсаҡ тиҫкәрелек менән йәнәш килә: ниндәйҙер киҫкен, хәл иткес мәлдәрҙә беҙ үҙ-үҙебеҙҙе еңә алмай, артҡа сигенәбеҙ, алтын урталыҡты табырға көс тапмайбыҙ. Тағы бер әйтер һүҙем бар. Тәү сиратта менталитет туған тел аша һаҡлана. Тел арҡылы кеше үҙен, унан һуң халҡын, мәҙәниәтен ҡабул итә. Шуға күрә, менталитет һаҡланһын өсөн беҙ, иң тәүҙә, телебеҙҙе һаҡлап ҡалырға тейешбеҙ...

**Ләйсән МАРАҠАНОВА.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Дүрт респонденттың да уйҙары бер нөктәгә килтерә кеүек: эйе, беҙ, яйлап булһа ла, үҙгәрәбеҙ. Яҡшы яҡҡамы - юҡмы, уныһы инде бөтөнләй икенсе, айырым һөйләшеү талап иткән тема. Иң мөһиме, башҡорт менталитеты тураһында һүҙ бара икән, тимәк, ул бар әле. Кешелек донъяһы заман менән бер ҡатар атлай. Әммә Хоҙай тарафынан бирелгән милләтте милләт иткән төп һыҙаттар барыбер һаҡланырға тейеш. Ул төп һыҙаттарҙы тел, тарих, мәҙәниәт менән бер ҡатар һаҡлау ғына мөмкин. Сөнки ошо төшөнсәләр генә милләтте киләсәкле итә...**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты эш сәфәре менән Свердловск өлкәһенең Үрге Пышма ҡалаһына барҙы. Президент Урал таукеметаллургия компанияһы президенты И. Махмудов менән осрашты, республика менән компания араһындағы хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙы.

✓Башҡортостанға Ямал-Ненец округынан рәсми делегация килде. Делегацияны округ губернаторы Юрий Неелов етәкләй. Республика йортонда губернатор Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов менән осрашты.

✓Киләһе йылда Өфөлә "Логопарк-Өфө" тип аталған ҙур логистик технопарк барлыҡҡа киләсәк. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтов "Авалон" компаниялар төркөмөнөң директорҙар советы рәйесе Александр Мостаков, Бөйөк Британияның "Рейвен" компаниялар төркөмөнөң башҡарма директоры Антон Бильтон менән был көндәрҙә ошо хаҡта һөйләшеүҙәр үткәрҙе.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендә ташҡынға ҡаршы комиссияның икенсе ултырышы булып үтте. Билдәләнелеүенсә, быйыл һыу баҫыу ҡурҡынысы бик юғары. "Башгидромет" белгестәре Ағиҙел йылғаһы бассейнында һыу кимәленең ғәҙәттәгенән 0,3-1,7 метрға юғарыраҡ күтәләүен хәбәр итә. Шулай ҙа апрелдә һауа торошоноң һалҡынса тороуы ташҡын осорон имен-аман үткәреүгә ышаныс уята.

✓Рәсәй Федерацияһы Волга буйы Федераль округының тулы хоҡуҡлы вәкиле Александр Коновалов Түбәнге Новгородта округтың милли-мәҙәни автономиялары һәм милли-мәҙәни йәмғәт ойошмалары вәкилдәре менән осрашыу үткәрҙе. Башҡортостандан унда "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәге идараһы рәйесе Риф Иҫәнов ҡатнашты.

✓21-22 мартта Магнитогорск ҡалаһында Европа һәм Азия халыҡ музыка коралдары оркестрҙары һәм ансамблдәренең I Халыҡ-ара фестивалендә БР-ҙың Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры (етәксеһе Башҡортостандың халыҡ артисы Рәмил Ғәйзуллин) Гран-при, ә оркестр янындағы ҡурайсылар ансамбле I урын яуланы.

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# АЛДАНЫРҒА ШАТБЫҘ ҘА УЛ,

## йәғни 1 апрель уңайы менән әйтелгән һүҙ

**Алдаҡ көн етте, йәмәғәт! Алдаҡсылар, төп башына ултыртыусылар, күҙ буяусылар байрамы менән һеҙҙе! Был көндө ҡайны берәүҙәр Уйын-көлкө көнө, Дүрәктәр байрамы тип тә атай. Әммә, барыбер, 1 апрелдең төп мәғәнәһе - бер-береңде алдау. Башҡа ерҙәрҙә нисектер, әммә беҙҙә, Рәсәйҙә, был байрамды ихлас билдәләйҙәр. Өйҙә һәм эштә, урам буйында һәм ҡунаҡта кешеләр бер-берεһенә туҙға яҙмаған һүҙ һөйләй, тегенеһе ышанһа, ысынға алһа, ҡыуана, йыл буйына, ҡабаттан 1 апрель еткәнсе, шуны иҫкә төшөрөп һөйләп йөрөй, нисек иттерεп оҫта алдай алғаны менән маһая.**

Күрәһең, шундайыраҡ кешеләрбеҙҙәр инде беҙ. Мотлаҡ кемдәлер алдарға һәм уның алданғанын күреп ҡыуанырға кәрәк беҙгә. Балалар ата-әсәләрен алдай, ир - ҡатынын, ҡатын ирен төп башына ултырта, түрә үҙенең хеҙмәткәрҙәрен алдатып эшләтә, улары үҙ сиратында етәксене алдарға маташа. Баҙарҙағы сауҙагәр алдап-йолдап үтемһеҙ тауарын юғары хаҡҡа тотторop ебәрә. Һатып алыусы иһә, алданғанын белһә лә, сифатлы әйберҙе арзан хаҡҡа алдым, тип үҙен йыуата һәм башҡаларҙы алдай. 1 апрель генә түгел, көн һайын тиерлек булып тора ындай хәлдәр. Һәм, әлбиттә, бөтә кеше лә түгел, әммә күпселек шулайта. Башҡаса был илдә йәшәп тә булмайҙыр, тигән уйға киләм ҡай саҡ.

Алдауҙың да төрлөһө була бит. Иң ғәйепһеҙе - 1 апрель көнө күршеңә йәки коллегаңа "аҡҡа һөйәнгәнһең бит" тип әйтеү. Ә инде иртәнсәк хәләл ефетеңә, "киләһе йыл 1 апрелгә үҙеңә шәшке тун алып бирәм", тиһәң, ул быға барыбер ышанмаҫ. Әммә тун алырға мәжбүр итәсәк. Мыжыпмы, илапмы, талашыпмы, әллә иркәләпме, барыбер. Йәғни, алдаһаң да, уйлап ҡына һөйлә. Алдау менән алдау араһында ла айырма бар бит. Мәҫәлән, сәйәсәттә "алдашыу" тигән һүҙ бөтөнләй юҡ. Уны дипломатия, йәки сәйәси маҡсатҡа ярашлылыҡ тигән һүҙбәйләнеш алмаштыра. Беҙҙең илдә был айырыуса ныҡ һиҙелә. Миҫалдар кәрәкме? Рәхим итегеҙ.

Хәтерләйһегеҙме, "Буратино мажаралары" китабында ағас малай алтын аҡсаларын күмгән ялан нисек аталғанын? Дөрөҫ, Мөғжизәләр яланы. Ә ҡайны илдә урынлашҡан ул? Әлбиттә, Дүрәктәр илендә.

Бөгөнгө Рәсәй тап ана шул илде хәтерләтә. Хатта персонаждары ла шул уҡ. Ҡурсаҡтарҙы эптә уйнатҡан Карабас-Барабастың кем икәнен беләһегеҙме? Юҡ, юҡ, Президентыбыҙ түгел, ә көн һайын беҙҙе мейеһеҙ ағас ҡурсаҡ урынына күргән ваҡытлы матбуғат саралары. Төлкө Алиса менән бесәй Базилионы ла күҙ алдына килтергәнһегеҙҙер. Улар иһә беҙҙең олигархтарҙы һынландыра. Нисек кенә булһа ла, халыҡты алдарға һәм таларға, аҡсаны күберәк йыйнарға, уны ашау-эсеүгә, күңел асыуға туҙҙырырға. Ә беҙ - буратинолар. Сепрәккә төшөрөлгән усаҡҡа ҡарап, тамшанып ултырған, алтын тәңкәләрҙе ергә күмһәң, Аҡса ағасы үҫеп сығасағына ысын күңелдән ышанған буратинолар.

**В**аҡытында, 1917 йылда, халыҡ "Ер - крәҫтиәндәргә, заводтар - эшселәргә!" тигән ялтырауыҡлы лозунгыларға алданып урамға сыҡҡандан башланды микән ул замана? Әллә иртәрәкме, Рәсәй империяһында уҡмы, башҡорттарҙы алдап, ерҙәренһыуҙарын тартып алған мәлдәнме? Бәлки, тағы ла иртәрәктер, урта быуаттарҙалыр? Уйлай торғас, маймылдар ағас башынан төшөп, тура атлап йөрөргә өйрәнеп, кешегә әүерелгән мәлдән үктер тигән фекергә киләм. Шул саҡта уҡ кеше бер-берεһен алдарға өйрәнгән. Дөрөҫ, тәүҙә ул алдашыуҙы, хәйләкәрлекте һунарҙа ҡулланған. Мамонтты, мәҫәлән, таш менән генә йығып булмай. Ә өҫтөнә сыбыҡ-сабыҡ ташланған сокорға барып төшкән хайуанды үлтереү бер ни ҙә тормай. Шунан кайһылыр аҡылының башына ошо уҡ ысулды башҡа кешеләргә ҡулланыу уйы килгән. Мулыраҡ, һимеҙерәк ҡалъяны эләктереү, башҡалар килтергән табышты бүлеү, ғөмүмән, кеше көтөүе менән идара итеү теләге килтерә алдашыуға. Ана, ҡайҙан башлана икән 1 апрель тарихы!

Үткән XX быуатта иһә алдашыу йәшәү рәүешенә әүерелдә. Советтар Союзында яҡты киләсәк төҙөйбеҙ тип алданып йөрөп, күрсәккә килеп терәлгәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ. Ә хосусилаштырыу мәлен хәтерләйһегеҙме? "Һары төлкө", ата "приватизатор" Анатолий Чубайс яҡын арала һәр бер кеше ваучерға "Волга" һатып ала аласаҡ, тигәйне түгелме? Ҡайны гаражда тора икән ул машиналар? Күрмәнегеҙме? Дәүләттән күрмәксе, башҡалар ҙа алдарға тотондо халыҡты. 1 апрелде көтөп тә торманы. "МММ", Властилина", "Хопер-инвест" һәм башҡа шундай фирмалар кешенең һуңғы аҡсаларын һыпырып алып китте. Төрлө кимәлдәге һайлауҙар ваҡытындағы алдауҙарҙы иҫәпләп бөтөрлөк тә түгел. Ә инфляция? Рәсми рәүештә иғлан ителгәне менән ысынбарлыкта беҙҙең кеҫәгә һуҡҡаны ер менән күк араһы һымаҡ бит.

**Һ**уңғы йылдарҙа иһә етәкселегебеҙ ҡасан алдағанын, ә ҡасан алдамағанын үҙе лә аңламай башланы, шикелле. Изге ниәт менән ойошторолған күп һанлы төрлө реформалар - ул нимә, алдаумы, әллә уйлап еткермәүме? Ҡаш теҙәтәм, тип, күҙ сығарыуымы?

Был эштәрҙең барыһы ла нисек эшләнә һуң, тиерһегеҙ. Үҙегеҙ төшөнмәнегеҙме ни әле? Карабас-Барабас беҙҙе, ағас ҡурсаҡтарҙы, эптә йөрөтә. Шул беҙгә ҡайҙа барырға, нимә һатып алырға, кемгә ышанырға, ә кемгә - юҡ, кемде һайларға, ә кемде - юҡ, кәңәш бирә, өгөтләй, саҡыра. Ваҡытлы матбуғат саралары кисә һәм бөгөн - Владимир Ильич Лениндың тапҡыр һүҙҙәре буйынса, коллектив агитатор һәм коллектив пропагандист. Кәрәк саҡта зәңгәр экрандарҙа Доренко кеүек "журналист-киллер", йәки Познер кеүек "аналитик" килеп сыға ла, үҙ фекерен көсләп тағып, кешеләрҙең аҡылын бутай. Психологтар фекеренсә, кеше көн һайын үлтереү күренештәренең ирекһеҙҙән шаһиты булһа (мәҫәлән, "зәңгәр экран" аша), ул берәй ҡасан ҡулына бысаҡ алып, кемде булһа ла һуясаҡ. Гәзит уҡыусыларға көн һайын "реформалар һеҙҙең файҙаға ғына үткәрелә, инфляция кәмей бара, фатир күплəп төҙөлә" тип тылҡыһаң, улар теләйме-юҡмы, быға ышанасаҡ. Ындай миҫалдар бихисап.

**Тимәк, йәмәғәт, беҙҙә 1 апрель йылына бер килгән көн түгел. Беҙҙә алдаҡ байрамы көн һайын. Шуға ла, исмаһам, 1 апрель көнө берберебеҙҙе алдамай ғына йәшәп ҡарайыҡ. Бәлки, килеп сығыр.**

**Таһир ИШКИНИН.**

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*

# Салауат районы мәҙәктәре

**Беҙҙең Арҡауыл ауылы урамдарының исем-аталышының барлыҡҡа килеүе төрлө ҡыҙыҡлы хәлдәргә бәйләнгән. Шуларҙың бер нисәһен һеҙҙең иғтибарға ла тәҡдим итмәксемен.**

### ҠАТЫҠ УРАМЫ

Ауылда Хәтмулла исемле оло йәштәге бер ағай йәшәгән. Рамаҙан айы башланғас, ураҙа тоторға уйлаған был. Кисен, көтөүҙән һуң, ир-егет, ҡарт-ҡоро йыйылышып ултырғанда Хәтмулланың кесе улы Басир үтеп барған.

-Басир, улым, кил әле, - тип саҡыралар быны, -Йә, һөйләп ебәр, атайың төшкөлөккә ни ашаны?

-Атай менән икәүләп, Алла бабай күрмәһен өсөн, баҙға төшөп ҡатыҡ эстек,- тигән малай иҫе китмәй генә.

Шунан бирле берәйһе "Ниндәй Хәтмулла?" тип һораһа, "Ҡатыҡ эскән Хәтмулла" ти. Ә ул йәшәгән урам "Ҡатыҡ урамы" булып ҡалды.

### ҠОТОЛДОБАШ

Бер йәш ғаилә кейәү яғынан ата-әсәһе менән бергә йәшәгән. Килен менән ҡәйнә араһындағы мөнәсәбәттәр ҡатмарлашып, йыш ҡына үҙ-ара ҡауғалап алғандар. Тиҙ-ҙән йәштәр үҙ йортона күсеп сыҡҡан һәм килен күргән бер кешегә: "Ҡотолдо баш", - тип һөйләп йөрөгән.

Шунан бирле был урамды "Ҡотолдобаш" тип атайҙар, ә айырым күсеп сыҡҡан ғаиләне: "Ҡотолдоғоҙмо?" - тип мәрәкәләйҙәр.

### ТАНЫНЫЛАР

Апайҙар, еңгәләр ҡунаҡҡа йыйыла. Барыһы ла килеп бөткәнсе, донъя мәшәкәте, юҡ-бар тураһында хәбәр һатып ултыралар. Шул саҡ урамдан өс юлсы үтеп барған. Әбейҙәр таный алмай:

-Йәштәр, ҡарағыҙ әле, кемдәр булды был?- тип һорай икән. Һүҙгә шаян Сәкинә еңгә:

-Берεһен танымайым, икенсеһе беҙҙең яҡтыҡы түгел, өсөнсөһө әллә кем, - тигән булған ти.

**Илнур ҠАЗЫХАНОВ,**
Салауат районы.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Учалы муниципаль филармонияһы артистары август айында Грецияға халыҡ-ара фестивалгә барасаҡ.

✓Бөрйән районының Әбделмәмбәт ауылында райондың ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуыуның шәжәрә байрамы булып үтте.

✓БР Хөкүмәте ултырышында Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығына әҙерлек саралары һәм республикағы миграция хәле тураһында мәсьәләләр ҡаралды. Ултырышты Премьер-министр Рафаэль Байдәүләтов алып барҙы.

✓"Башҡортостан" телерадиокомпанияһы режиссеры Венера Йомағолованың "Ҡурай-бейеү" һәм "Еҙем әбейҙәре" тигән фильмдарын халыҡ-ара конкурс комиссияһы "Визоника-2007" I Халыҡ-ара телевизион фестивалдең ижади конкурсында ҡатнашыуға тәҡдим итте. Конкурс 24-29 апрелдә Польшала үтәсәк.

✓Мәсетле районы хакимиәте тарафынан булдырылған билдәле шағир, сәсән, импровизатор Рәшит Әхтәри исемендәге премия был юлы педагог, крайҙы өйрәнеүсе Марат Ғафаровҡа тапшырылды.

✓Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институтында "Заманса уҡытыу процесы: тәжрибә, проблема һәм перспективалар" исемле төбәк-ара ғилми-ғәмәли конференция булып үтте.

✓Бөгөн 11-се балалар музыка мәктәбендә "Гел булһын йыр" исеме аҫтында музыкаль-теоретик олимпиада үтә.

✓Түбәнге Новгородта РФ Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле карамағындағы Совет ултырышы булды. Уның эшендә БР Хөкүмәте Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтов етәкселегендәге рәсми делегация ҡатнашты. Ултырышта мағариф һәм һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләре ҡаралды.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты "ВТБ24" ябыҡ акционерҙар йәмғиәте президенты М. Задорнов менән осрашты. Осрашыуҙа Өфөлә "ВТБ24" банкының филиалын асыу мәсьәләһе тикшерелде.

✓Учалының "Ирәмәл" спорт клубы тәрбиәләнеүсеһе Регина Түләкова каратэ буйынса "Сыбар юлбарыҫ" халыҡ-ара турнирында алтын миҙал яуланы. Эдик Һабанбаев, Ринат Сафин, Тимур Замановтар ҙа яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәште.

✓ *Жюри ағзаһы педагогия фәндәре кандидаты Миңлебай Юлмөхәмәтов дәрестәрҙә компьютер технологияларына ҙур урын биреп, беҙ роботтар тәрбиәләйбеҙ түгелме, тигән бик тә урынлы һорау ҡуйҙы.*



*АФАРИН!*

# РУХИӘТ ҺАҠСЫЛАРЫ...

## һынау тотто

**“Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2007" төбәк-ара бәйгеһенә йомғаҡ яһалды. Тантанала Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев, мәғариф министры Зиннәт Аллаяров һәм башҡа мәртәбәле ҡунаҡтар ҡатнашты.**

Бәйгеселәр ике турҙа һынау үтте. Тәүгеһендә улар ижади эш, әҙәби әҫәргә анализ, эш тәжрибәһен тәҡдим итһә, икенсеһендә мастер-класс күрһәтте һәм матбуғат конференцияһында журналистарҙың, жюри ағзаларының һорауҙарына яуап бирҙе. Уҡытыусыларҙың һәр эше менән яҡындан таныш булған жюри ағзалары, атап әйткәндә, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире, филология фәндәре докторы, профессор Данис Тикеев әйтеүенсә, өлкән быуын уҡытыусылары эҙләнеүсән булыуҙары, йылдар буйы тупланған тәжрибәләре менән алдырһа, йәштәр иһә, үҙ-үҙҙәренә ышаныс, яңыса фекер йөрөтөүе, яңы алымдарҙы тиҙ үҙләштерә, педагогия һәм психология фәненең яңы асыштарына нигеҙләнеп эш итеүе менән ҡыуандырған. Ысынлап та, йәш быуын уҡытыусылары араһында алдынғы технологияларға таянып эш итеүселәр байтаҡ ине. Эш тәжрибәһе менән уртаҡлашҡанда ла күптәр ошо йүнәлешкә баҫым яһаны. Был бер яҡтан ҡыуандырһа, икенсе яҡтан уйланырға ла урын ҡалдыра. Был хаҡта жюри ағзаһы педагогия фәндәре кандидаты Миңлебай Юлмөхәмәтов дәрестәрҙә компьютер технологияларына ҙур урын биреп, беҙ роботтар тәрбиәләйбеҙ түгелме, тигән бик тә урынлы һорау ҡуйҙы. Ысынында гуманитар йүнәлешле дәрестәрҙе компьютерлаштырыу дөрөҫмө икән?

- Уҡытыусы тормоштоң уртаһында ҡайнарға, илдә барған яңылыҡтар менән даими хәбәрҙар булырға тейеш. Ә алдынғы технологиялар ҡулланып эшләүҙе заман үҙе талап итә. Шулай ҙа тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә улар темаға ярашлы, урынлы һәм сама белеп ҡулланылырға тейеш, - ти үҙ тәжрибәһенән сығып Баймаҡ районы Иҫке Сибай мәктәбе уҡытыусыһы Гөлнур Ҡотлоғәлләмова.



Бәйгелә еңеүселәр

Ә бына Учалы районы Комсомол мәктәбе уҡытыусыһы Зөлфиә Фазылова иһә тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ, һөҙөмтәле алым уйлап тапҡан.

- "Бумеранг" тигән яңы алым менән эшләй башланым. Йәғни уҡыусылар төркөмдәргә бүленә һәм төркөмдәр бер-береһенә һорауҙар бирә. Беренсе төркөм һорау бирә лә, шуның яуабы нигеҙендә икенсе төркөм беренселәргә һорау бирә. Был һөҙөмтәле ысул тип һанайым, ошолай эшләгәндә, балаларҙың фекерләү ҡеүәһе үҫешә, белемдәре лә нығына.

Балаларҙы белем тауына әйҙәгәндә һәр уҡытыусы һынау тота: намыҫы, баланың киләсәге, ата-әсәһе алдында. Рус мәктәптәрендә белем биреүсе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары өсөн дә быйылғы уҡыу йылы оло һынау осоро булды. Белеүебеҙсә, телде өйрәнергә теләмәгән балалар ҙа, яңы сәйәсәткә ҡырҡа ҡаршы булған ата-әсәләр ҙә байтаҡ. Ошо көсөргәнешкә нисек ҡаршы тора, ситуацияны нисек һындыра алған икән был уҡытыусылар? Өфөнөң 156-сы урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гүзәл Фәхрисламованың эш ысулына ҡолаҡ һалайыҡ:

- Уҡыу йылы башында ата-әсәләр йыйылышы үткәрҙек, үҙем унда сығыш яһаным, һорауҙарға яуап бирҙем. Ата-әсәләргә бала ни тиклем күберәк тел белә, уның фекерләү ҡеүәһе шул ҡәҙәр нығыраҡ үҫешә, тигән фекер һеңдерҙем. Ғөмүмән, башлап юл ярыуы еңелдән булманы, һәр бала менән индивидуаль эшләргә тура килде. Хәҙер иһә уҡырға телмәгән балалар ҙа, ризаһыҙлыҡ белдергән ата-әсәләр ҙә юҡ.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы өҫтәүенә ижадсы, яҙыусы ла икән, уның дәрестәренең рух, матурлыҡ донъяһына илтеүсе юл башы икәнлеге мәғлүм. Шуға күрә лә "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2007" төбәк-ара бәйгеһендә Гран-при Сибай ҡалаһының Ирәндек лицейы уҡытыусыһы, Сибай төбәк яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе Хәйҙәр Тапаҡовҡа тапшырылыуы осраҡлы түгелдер.

- Бәйгелә еңеүемә ижад менән шөғөлләнеүем, яҙыусы булыуым ҙур ярҙам итте. Телебеҙҙе, еребеҙҙе һаҡлау алда торған иң мөһим бурысыбыҙ. Еребеҙ, телебеҙ яҙмышы киләсәк быуын ҡулында, ә йәштәр рухһыҙ, телен белмәй, әҙәбиәт уҡымай үҫә икән, халҡыбыҙҙың яҙмышы кем ҡулына ҡала тигән һүҙ, - тип яна Хәйҙәр Ниғәмәт улы.

**Шулай итеп...**

**"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2007" бәйгеһендә Стәрлетамаҡ ҡалаһының 2-се гимназияһы уҡытыусыһы Йыһангир Ишбаев, Өфөнөң 140-сы башҡорт гимназияһынан Ирек Әхмәтшин, Баймаҡ районы Иҫке Сибай мәктәбенән Гөлнур Ҡотлоғәлләмова, Республика башҡорт лицей-интернатынан Таңсулпан Исламова иң-иңдәр тип табылһа, Ирек Әхмәтшин һәм Гөлнур Ҡотлоғәлләмова гәзитебеҙҙең махсус бүләгенә лайыҡ булды. Ә бәйгегә килгәндә... Заман һынауҙарына ҡаршы торған, үҙ һөнәренә тоғро ҡалған телебеҙ, рухыбыҙ һаҡсылары - башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары барҙа, уларҙың эшенә дәрт, дарман өҫтәрҙәй ошондай бәйгеләр ҙә йәшәргә тейеш.**

**Рәлиә БИКТИМЕРОВА.**



Учалынан Зөлфиә Фазылова

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*

## Учалы мәҙәктәре

### ҒИЛМИНИСАҺЫ КЕМ?

Һуғыш ваҡытында йәш килен-ҡыҙҙарҙы эшкә ҡушып, бригадир өй беренсә йөрөр ине.

- Ғилминиса, бесән йыйырға сыҡ, - ти икән был бер көндө.

- Ғилминисаһы кем бисәһе? - тип һорай килененең исемен белмәгән ҡайныһы.

- Килененң дәһә, - ти бригадир.

Борон бит ололар, бигерәк тә ҡәйнә менән ҡайны, килендәренең исемен әйтеп өндәшмәгән.

Һуғыш осоронда һәм унан һуңғы йылдарҙа ла колхозсыларға ондо (игенде) исемлек буйынса биргәндәр. Олатайым ырҙын табағында эшләй торғайны.

- Исемлеккә Ғилминисаны яҙҙығыҙмы?- тип һорай бригадир. Килененең исемен онотоп ебәргән олатайым:

- Ғилминисаһы кем бисәһе? - ти тағы.

Хәҙер шуны лаҡап итеп, таныш булмаған берәй кеше тураһында һүҙ сыҡһа, "Ғилминисаһы кем бисәһе?", тиҙәр беҙҙең ауылда.

### МИНЕҢ БЕСӘН КӘРТӘЛӘНГӘН

Колхоз өсөн бесән эшләп бөтмәйенсә, халыҡҡа бесән әҙерләргә рөхсәт итмәй торғайнылар. Яҡын-тирәләге ерҙәр - колхоздыҡы. Халыҡ үҙенә кәрәкле бесәнде алыҫ урманда эшләй, һуңынан кәртәләп ҡуя. Сөнки октябрь айы тыумайынса, мал аҙығын ҡураға алып ҡайтырға рөхсәт юҡ.

Бер ваҡыт урманда янғын сыға. Был хаҡта ишеткән йәштәр:

- Әбдрәхим ағай, урманда янғын, һеҙҙең бесәнлек яна, - тиҙәр.

- Минең бесән кәртәле, янырға тейеш түгел, - ти икән ағай.

**Әклимә АБДРАХМАНОВА.**
Учалы районы.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

☑ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы ултырышта предприятие, ойошма, учреждениеларға ҡараған техниканы сираттағы техник ҡарауға әҙерләү барышы тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Ул 1 февралдән 10 июнгә саҡлы үткәреләсәк.

☑ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев баш ҡалала "Йәш ғаилә" конкурсы үткәреү тураһында ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Конкурстың тәүге туры баш ҡала райондарында 1 сентябргә тиклем үткәрелә. Икенсе тур сентябрҙә үтәсәк.

☑ Мәрйәм Солтанова исемендәге мәҙрәсәлә Земфира Сәйетбатталованың шәхси күргәҙмәһе асылды. Профессиональ рәссамдың ижадында дини йолалар темаһы, ғәрәп каллиграфияһы ҙур урын алып тора.

☑ Был аҙнала "Башпромбанк" ҡала социаль программаһы сиктәрендә социаль торлаҡ алыу өсөн тәүге ипотека кредиты бирҙе. Хөкүмәт һәм "Уралсиб" етәкселәре килешеүенсә, "Башпромбанк" базаһында махсуслаштырылған ипотека банкы булдырыласаҡ. Быйыл Өфөлә 160 ғаилә ошондай кредит аласаҡ.

☑ 3-5 апрелдә Өфө дәүләт технология һәм дизайн колледжы базаһында "Евро-Уфа-Азия" йәш модельер-дизайнерҙар һәм парикмахер-стилистар форумы үтәсәк.

☑ "Башавтотранс" предприятиеһына VDL-НефАЗ" ҡала автобустарының тәүге партияһы тапшырылды. Өфө ҡалаһы өсөн Нефтекама автозаводында тағы 160 автобус етештереләсәк.

☑ 17 апрелдә баш ҡаланың Нефтселәр мәҙәниәт һарайында "Һылыуҡай - 2007" бәйгеһе була. Унда быйыл 12 башҡорт һылыуы ҡатнашасаҡ.

☑ 1 апрелдән дәүләт структураларындағы һәм шәхси предприятиеларҙағы кадрҙар хеҙмәте етәксе вазифаларға тәғәйенләнәсәк кешеләрҙе милицияның мәғлүмәт базаһы аша ла тикшерергә тейеш. Рәсәй Эске эштәр министрлығы тарафынан ғәйепле кешеләрҙең "ҡара исемлеге" төҙөлгән. Әгәр ҙә етәксе урынға тәғәйенләнеүсе суд тарафынан етәксе урындарҙа эшләүгә хоҡуғынан мәхрүм ителгән кеше булһа, эш биреүсегә штраф һалынасаҡ.

✓ *"Шаяниум"да ҡатнашып йөрөгән идеялы, фекерле егет-ҡыҙҙарҙың киләсәге өмөтлө. Сөнки былдай типтағы "идея генераторҙары" үҙҙәрен рекламала ла, журналистикала ла, ижади бизнеста ла иркен тота.*



*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# Мөғжизә был "Шаяниум" –

## отҡорҙарҙы асыр шаян уйын



"XX Централ" командаһы

✓Тәүге көндә Шаҡша бисҭәһендәге 122-се мәктәптең "ША-ШУ-ША", Ҡасим Дәүләткилдиев исемендәге Республика художество гимназия-интернатының "Рәссамдар фабрикаһы", 140-сы башҡорт гимназияһының "Ығы-Зығы" командалары сығыш яһаны. "ША-ШУ-ША" ның сығыштары сағыштырмаса сағыу күренде. Әйтәйек, бөгөн бар донъяны сырмалсыҡҡа сырмап алған "МакДоналдс" кафеһына антиреклама яһап, балалар глобализацияға ҡаршы булыуҙарын үҙҙәренсә сағылдырырға тырыштылар. Инорстарҙың шаяртыуҙарының тапалмаған булыуы күҙгә ташланды. Ағымдағы уҡыу йылында Өфөлә Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы үҙ ишектәрен асты. Был белем усағынан бәйгегә "Кендектәр" исемле команда сыҡты. Әйткәндәй, уларҙы ярышҡа "Шаяниум"дың ветерандары булған егеттәр әҙерләгән, шуға ла бәйгеселәр, тәү тапҡыр сығыш яһауға ҡарамаҫтан, "Шаяниум" форматына ҡалыплаша алған. Әлбиттә, команданың сығыштары етешһеҙлектәрҙән дә азат түгел ине. Ҡыҙҙарҙы "енси объект" булараҡ һүрәтләү, ә егеттәрҙең "зәңгәрҙәр" булып ҡыланыуы әхлаҡи йүндән хуларлыҡ түгел. "Кендектәр" бөгөн Рәсәйҙә мегапопуляр шоу "Комеди Клаб" ("Comedy CLUB") резиденттары стилендә сығыш яһауы менән айырылып торҙо.

✓"Шаяниум" булдырылған тәүге йылдарҙа чемпион исеменә лайыҡ булған 136-сы башҡорт гимназияһының "Һупайлы дәрүиштәре" командаһы ни өсөндәр 2006 йылғы ярыштарҙа ҡатнашыуҙан баш тартҡайны. Һәм бына, ниһайәт, быйыл "Һупайлылар" ҡайтанан "Шаяниумға" ҡайтты. Был команда сығышында тапалмаған лаҡапкөләмәстәр булыуы бик яҡшы күренеш. Мәҫәлән, "һупайлылар" ассимиляцияға бирелгән башҡорт балаларына, төрлө трибуналарҙан башҡорт халҡы, теле һәм ере тураһында оран һалыусыларҙың күбеһенең үҙ балаларыейәндәре туған телдә һөйләшмәүенә, тиҙ арала республикабыҙҙа һәр дүртенсе кеше ҡытай милләтенән буласағына үҙҙәренең шаян ҡарашын белдерҙе.

Фәзиз Әлмехәмәтов исемендәге Республика музыка гимназия-интернатынан "Ҡыҙыҡ-мажор" командаһы ла быйыл бәйге майҙанына тәүге тапҡыр сыкты.



"Башҡорттар.ru" командаһы

Тимәк, "Шаяниум"ға профессиональ рәссамдарҙан башҡа, профессиональ музыканттар ҙа өҫтәлде. Һәм дәрәжәһен белеп өҫтәлде! Был командала сағыу йондоҙ, лидер КВН-сы асыландыр - ул Баймаҡ районы егете Фидан Ҡолмөхәмәтов. "Музыкаль" конкурска "Ҡыҙыҡ-мажор"ҙар үҙенсәлекле сценарий уйлап тапкайны: өс батырҙың - Салауат, Урал һәм Әминбәктең Рәсәй дәүләтенә ҡушылыр алдынан булған мажаралары оҫта ғына сағылдырылды.

✓Өсөнсө көндәге бәйгелә иң көслөләр ярышты. Ике йыл рәттән беренселекте бирмәгән Фатима Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының "XX Централ" командаһы быйыл тағы ла иң көслө команда тип табылды. Был команданың һәр номинацияларға сығышы ла профессиональ кимәлгә торошло ине. Ныҡлап әҙерләнгәндәр, шаярыуҙары берәүҙе лә ҡабатламай, бик үҙенсәлекле. Йыйнаҡтар, ойошҡандар. Команда рухы бик нык һиҙелә. Башҡа командаларға уларҙан өйрәнәһеләр етерлек.

Республика иктисад лицей-интернатының "Really" командаһы ла тырышҡан. Бейеүҙәренә лә, йырҙарына ла һүҙ тейҙерерлек түгел. Хәйер, "Шаяниум"да ҡатнашыусы бөтә командалар ҙа йырға һәм бейеүгә шәп. Ошоға тапалмаған шаяртыуҙар, импровизация ла ҡушылһа, тағы ла шәп булаһы ла бит. Был етешһеҙлек, әлбиттә, "иктисадсылар"ға ла ҡағыла.

Һәм, ниһайәт, Республика башҡорт лицей-интернатының "Башҡорттар.ru" командаһы алышҡа сыкты. Әйе, улар үҙгәргән. Беренсенән, командалағы бар егеттәр алышынған. Күҙ өйрәнмәгәнгәме, команданың элекке ағзаларының һәр береһендәге һымаҡ оригиналь образ да юҡ. Икенсенән, сығыш яһауҙың концепцияһында ла яңылыҡ юҡ. Кисәге хит. Бөгөн бөтәһе лә уларса ҡылана. Айырым уңышлы шаяртыуҙар булды булыуға. Мәҫәлән, "башҡорттар" 50 йылдан һуң буласаҡ әҙәбиәт дәресен күҙ алдына килтерҙе һәм унда кемдең шиғырҙарын ятлаласаҡтарына ишараланы. Ул шиғри өҙөктәр бөгөнгө көндә башҡорт эстрадаһын тултырған, йәштәрҙең "кумирына" әйләнгән йырсыларҙың йыртыҡ йырҙарынан алынғайны. Йәғни ошолайтып, улар бөгөнгө башҡарыусыларҙы һемәйтте.

Дим бисҭәнән ике Вьетнам егетен уртаға алып, 102-се башҡорт гимназияһының "Депо-Ханой" ҡыҙҙары сәхнәгә сыкты.

Вьетнам егеттәренең икмәктоҙлоҡ башҡортса шаяртып маташыуҙары, шулай уҡ командаһың үҙҙәре йәшәгән Дим бисҭәһен сағылдырған шаяртыуҙары тамаша ҡылыусыларҙы йылмайырға мәжбүр итте.

Был көндө шулай уҡ 48-се башҡорт лицейының "Бисҭә лидерҙары" ла ярышты. Былтыр, әлбиттә, уларҙың сығышы сағыурак булғайны.

✓Дүртенсе көндәге һайлап алыу туры Фатима Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының тамаша залында уҙҙы. Сибай башҡорт гимназия-интернатының "Кендек" командаһының тәҡдим ителгән бар номинацияларҙа ла сығыш яһауы үҙе үк хуплауға лайыҡ. Етмәһә, баш ҡала командаларының күбеһенә ҡарағанда оригиналерәк, шаянырак, күп осракта импровизацияға королған тамаша күрһәтте улар. Заманса, тапалмаған шаяртыуҙары ла байтаҡ ине. Бына, мәҫәлән, бер шаяртыу. Сәхнә артында тимер акса ҡыштырҙауы ишетелә. Егет дуҫынан һорай: "Нимә тауышы сыға унда?". "Ә-ә-ә, башҡорттар Рәсәй дәүләтенә ҡушылырға киттe". Сәхнә артында кешеләр йүгергән тауыш ишетелә. "Ә хәҙер нимә унда?" "Әбйәлилдәр Магнитка ерҙәрен һатырға йүгерҙе". Әйткәндәй, Сибай "Кендек"тәре "Шаяниум"да берҙән-бер әхлаҡлы тамаша ҡуйҙы, тиһәк, яңылышмаҫбыҙ. Улар мәктәп уҡыусылары КВН-ы лигаһы тап ошолай булырға тейеш икәнлегенә бик матур итеп ишараланы.

"Шаяниум"да Межгорье ҡалаһынан, Стәрлетамаҡтан, Мәләүездән килгән командалар ҙа ярышты был юлы. Улар башҡа ҡатнашыусыларҙың сығышын ҡарап, "Шаяниум" форматын үҙләштереп, фәһем алып, икенсе йылға әҙерлекле килерҙәр, тигән өмөттә ҡалайыҡ. Ғөмүмән, артабан "Шаяниум"дың географияһы тағы киңәйер, тип ышанғы килә. Сибайҙарҙың сығышы өфөләргә конкуренттар булырлыҡ егет-ҡыҙҙар республиканың башҡа ҡала-районларында ла барлығын иҫбатланы бит инде.

✓Һәм, ниһайәт, 23 февралдә Башҡорт дәүләт филармонияһында "Шаяниум - 2007" фестиваленең Гала-концерты уҙғарылды. Дүрт көн дауамында барған көсөргәнешле ярыштан һуң еңеүселәр билдәләнде.

**"Сәләмләү" номинацияһы:**
**1-се урын - "Башҡорттар.ru"**
**2-се урын - "Dipo-Hanoy"**
**3-сө урын - "XX Централ"**

**"Эстрада миниатюралары" номинацияһы:**
**1-се урын - "Кендектәр"**
**2-се урын - "Ығы-Зығы"**
**3-сө урын - "Рәссамдар фабрикаһы"**

**"Музыкаль сәнскеләр" номинацияһы:**
**1-се урын - "XX Централ"**
**2-се урын - "Башҡорттар. ru"**
**3-сө урын - "Тағы ла ике" менән "Ҡыҙыҡ-мажор"**

**Өйгә эш, йәки "КВН стилендәге оригиналь сәхнә күренеше" номинацияһы:**
**1-се урын - "Ығы-Зығы"**
**2-се урын - "XX Централ"**
**3-сө урын - Сибай гимназия-интернатының "Кендек"тәре.**

Быйылдан алып бар номинацияларҙа ҡатнашып, дөйөм балл иҫәбе буйынса беренсегә сыҡҡан командаға күсмә "Шаяниум" кубогы тапшырыла башланы. Шулай итеп, Гран-призы лайыҡлы рәүештә "XX Централ" яуланы. "Ҡатын-ҡыҙ ролен иң оҫта башҡарыусы" 140-сы башҡорт гимназияһынан Алһыу Мурзина булһа, "Ир-егет ролен иң оҫта башҡарыусы" тип 158-се башҡорт гимназияһы уҡыусыһы Володя Зубов табылды. "Байтус" тапшырыуының махсус призына Сибай гимназия-интернатының "Кендек" командаһы лайыҡ булды.

## Шаярыуҙарҙан

**Башҡорттар.ru:**
Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Республика башҡорт гимназия-интернатында:
- Егеттәр, ниңә һеҙ быйыл "Шаяниум"да ҡатнашмайһығыҙ?
- Беҙҙең гимназия һеҙҙеке кеүек әле яңы ғына ойошторолмаған. Беҙ олпат, абруйлы белем усағы. Шуға ла теләһә ниндәй шау-шыулы уйындарҙа ҡатнашырға, беҙ нәмә, бала-сағамы ни?
- Ә-ә-ә, улайһа һеҙ "ҡарттар йорто" тип аталаһығыҙ икән.

***

**"Кендектәр":**
Земфира Байбулдинаның студияһына ике йырсы егет килеп инә:
- Земфира апай, һаумыһығыҙ. Беҙ гастролдәрҙән әйләнеп ҡайтыҡ. Паспорттарыбыҙҙы кире ҡайтара алмаҫһығыҙмы икән?
- Ҡайтарырмын. Тик Теләүембәт ауылындағы корпоратив кисәгә барып, тағы ла бер концерт ҡуйығыҙ ҙа...

***

**"Кендек", Сибай ҡалаһы:**
- Егеттәр, Башҡорт дәүләт университетының 450 йыллыҡ юбилей уңайынан ниндәй сара әҙерләгәнен беләһегеҙме?
- Юҡ, ниндәй?
- 450 йыллыкта - 450 студент әрмегә юлланасаҡ...

***

Егеттәр сәхнәлә һөйләшеп тора. Шул мәлдә эргәләренән ауырлы ҡатын менән ир йүгереп уҙып китә:
Ҡатын: Фатир алабыҙ.
Ир: Юҡ, машина...
Ҡатын: Фатир, тим бит.
- Егеттәр, беләһегеҙме, әле эргәбеҙҙән нәмә уҙып китте?
- Юҡ, нәмә?
- 250 мең һум!!!

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**"Шаяниум"дың биш йыллыҡ тарихын анализлағанда шул күҙгә ташлана: ҡатнашыусыларҙың тышҡы йөҙө бар. Бөтәһе лә берҙәм дизайнлы кейемдә йә бер төҫлө футболкаларҙа сығыш яһай, үҙ ҡорғандары бар, музыкаль биҙәлеш, бейеү һәм йырҙар ҙа яйға һалынған. Әммә... Яңы концептуаль ҡараш, сюжеттар, сценарийҙар юҡ. Импровизация юҡ. Даими, сағыу, тамашасы хәтерендә ҡалырлыҡ образдар тыуҙырылмай. Ритмика һаҡланмай. Регламент ваҡыты үтәлмәй. Үҙәк телеканалдарҙа ҡасандыр "Аншлаг", "Кривое зеркало" тапшырыуҙарында, башҡа КВН уйындарында яңғыраған шаяртыуҙар, идеялар ҡабатланыуы дауам итә. Интернеттан алынған көләмәстәр ҙә ишетелеп ҡала. Бында төп гәйеп "Шаяниум"да ҡатнашыусыларҙа ла түгелдер. Улар ойоштороусыларҙың талабына яуап бирергә генә тырыша. Алға барыр өсөн яңынан-яңы идеялар, сценарийҙар, ынтылыштар булдырырға кәрәк.**

**Ә шулай ҙа... "Шаяниум"да ҡатнашып йөрөгән идеялы, фекерле егет-ҡыҙҙарҙың киләсәге өмөтлө. Сөнки былдай типтағы "идея генераторҙары" үҙҙәрен рекламала ла, журналистикала ла, ижади бизнеста ла иркен тота. Рәсәй рекламаһы океанының акулалары - ҡасандыр тап КВН уйынында ҡатнашыусылар бит. Һәр милләт, әгәр ҙә үҙенә яҡшы киләсәк гарантияларға теләй икән, үҙенең энергияһын һәм сығымдарын теләһә ҡайҙа түгел, ә балаларға сарыф итергә бурыслы. Башҡа өлкәләргә сарыф ителгән сығымдар, көстәр йыш ҡына елгә осоусан, әммә лайыҡлы кешеләргә тәрбиәләүгә тотонолғандары ваҡыт үтеү менән бөткөнөҙ байлыҡ сығанағына әүереләсәк. Бөгөнгө "Шаяниум"сылар быуыны 15-20 йылдан халҡыбыҙҙың иң әүҙем һәм емешле вәкилдәренә әйләнәсәген билдәләгәндә, ошондай шәхес тәрбиәләй һәм үҫтерә торған сараларға иғтибарҙы ла, аҡсаны ла йәлләмәҫкә кәрәктер ул.**

**Марат АБДУЛЛИН.**

ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК

# Шәмиғол хәлфә

**Сәғәҙәт Сәйфуллин һөйләгәндәрҙән**

Беҙ Һатлыҡ ауылында йәшәй инек. Бер саҡ ауырыу әсәйемде атайым Шафиҡтың дуҫына - Шәмиғол хәҙрәткә алып киттем. Ҡаршыбыҙға хәлфәнән сығып килгән ике таныш ҡатын тап булды. Улар әсәйемә былай тине: "Уй, Хөршиҙә, беҙ ифрат оятлы булдыҡ. Хәлфә өшкөрөп бөткәс, саҙаҡабыҙҙы алманы. "Аҡсағыҙҙы ҡыҙғанып, икәү-ара һөйләшеп килдегеҙ, аҡсағыҙ кәрәкмәй, тип оятка ҡалдырҙы. Ул беҙ уйлағанды ҡайҙан белде икән?"

Хәлфә беҙҙе: "Улым, атың тыңлашмаймы, сығынсылаймы? Атың да бик хәлһеҙ, ябыҡ ҡына шул", тип ҡаршы алды. Шунан: "Ни эшләп атыңдың ауыҙлығын һалдырманың, бар, һалдырып ин", - тип мине сығарып ебәрҙе. Мин хәлфәнең юлда оҙаҡлап килеүебеҙҙең сәбәбен дә, аттың ауыҙлығын һалдырмауымды ла асыҡтан-асыҡ әйтеүенә аптырап ҡалдым.

Хәлфә әсәйемде дауалағандан һуң, тоҙ өшкөрөп, бетеүҙәр яҙып бирҙе, ҡайтанан ауырымаҫһың, тип ышандырҙы. Ҡайтырға әҙерләндек. Атты егеп бөтөп, ҡапҡанан сыға башлағас, олатай: "Атыңды туктат", - тип бойорҙо. Атты туктаттым. Хәлфә: "Атыңды ауыҙлыклламағанһың бит, юлың тау аша үтә, атың өркөп алып ҡасһа, үҙегеҙҙе харап итеүе бар, ауыҙлыкла", - тине. Хәлфә минең ат еккәндә күрмәне, уның ауыҙлыкланмағанын ҡайҙан белде икән, тип аптырап ҡуйҙым.

Йылдар үтә торҙо. Мин биш йыл Ҡара диңгеҙ флотында хеҙмәт итеп ҡайттым. Ҡайткас, ҡыҫка ваҡытлы бухгалтерҙар курсында уҡып сыҡтым. Үҙебеҙҙең Һатлыҡ ауылындағы хужалыкта өлкән бухгалтер булып эшләй башланым. Бөйөк Ватан һуғышынан һуң емерек хужалыкты аяҡка баҫтырыуы бик еңелдән түгел ине. Хужалык етәксеһе Ҡасим Йәғәфәров хужалык малдарына бесән әҙерләү эшенең һүлпән барыуына борсолоп, ни эшләргә лә белмәй йөрөгән бер мәлдә, Шәмиғол хәлфә атайым Шафик янына Һатлыҡ ауылына килеп төштө. Хәлфәнең килгәнен ишетеп, ауылыбыҙҙағы барлыҡ сирле кешеләр беҙҙең өйгә килеп тулды. Хәлфә ҡайҙан белгәндер инде хужалыктың ауыр хәлдә икәнен, минең аша рәйесебеҙ Ҡасим Ғариф улын саҡыртып алды. Рәйес килеп, олатай менән бик оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙы. "Хужалыҡ малдарына аҙыҡ әҙерләтергә акса бирәм, - тине ул аҙаҡ. - Ә һеҙ өмә яһағыҙ". Шәмиғол хәлфәнең сирлеләргә генә түгел, ә тотош хужалыктың эшен дә ҡайғыртыуы аптыраткайны шунда. Был ярҙамы өсөн район етәкселәренең Шәмиғол хәлфәгә рәхмәт белдереүе тураһында ла хәтерләйем.

## Тағы бер ярҙамы

Мин ул йылдарҙа Мораҡ МТС-ы зонаһы буйынса райком комсомолы инструкторы булып эшләй инем. Юлдыбай, Төпсән ауылын берләштергән "Ҡыҙыл таң" күмәк хужалығы етәкселегө йыл һайын "Оло Эйек" йылғаһынан ҡарағай ағасы ағыҙып килтертә. Был эш ифрат ауыр, күп сығымдар талап итә.

Бына бер саҡ Шәмиғол хәлфә Мораҙым ауылына килеп, хужалык етәксеһе Хәсән Байгильдиндан улы Дамирға өй буратып биреүен һорап мөрәжәғәт итә. Етәксе бүрәнәне ҡыуып килтереү ауырлаша барыуын әйтә. Хәлфә шунда үҙ ярҙамын тәкдим итә: "Мин ағасты ағыҙып, ҡыуып алып килеүселәргә аҡсаны үҙем бирәм, әмә яһағыҙ". Шулай итеп, Шәмиғол хәлфәнең ярҙамы менән ағасты Әүәшле тамағынан Мораҙым ауылына бер аҙнала ҡыуып килтереүгә өлгәшелдә. Егеттәр көндөҙ арыу-талыуҙы белмәй, бил быуарҙан ағас ҡыркалар, кистәрен бер аҙ күңел асып, фильм ҡарайҙар. Иртәгәһен тағы ең һыҙғанып эшкә тотоналар. Бер генә егет тә ҡарышмай эшләне. Күрәһең, хәлфә уларға көс-ҡеүәт биргәндер инде.

Ағыҙып алып килгән ағасты Мораҙым ауылы эргәһендә ярға сығарыуҙы миңә ойоштороға тура килде. Килешеү буйынса, аҙаҡ хәлфәнең улы Дамирға өй ҙә бураттык. Бөтә сығымдарҙы хәлфә үҙе күтәреп, хужалыктың эшен еңеләйтте. Бына шундай иҫ киткес кешелеклe, изге йән эйәһе ине Шәмиғол хәлфә.

**Миңнулла ӘЛИМҒОЛОВ,**
Күгәрсен районы.

ШУЛАЙ ИКӘН...

# ӘҘӘМДЕҢ УЛДАРЫ,

## йәғни Ерҙәге тәүге үлтереш тарихы

**Ер йөҙөндә әҙәмдең беренсе мәртәбә башҡа әҙәмде үлтереүе тарихы үҙе үк уларҙың Алла урынлаштырған тәртипте һанға һуҡмауы тураһында һөйләй.**

Әҙәм менән Һауа оҙаҡ ваҡыт күрешмәй торғандан һуң осрашкас, Мәккәлә йәшәргә ҡарар итә. Бында берәм-берәм балалары донъяға килә. Уларҙың барыһы ла Һауа ҡарынында яралып тыуған балалар булғас, бер туған иҫәпләнә. Аллаһы Тәғәлә законына ярашлы, бер туғандар араһында никахлашыу тыйыла. Әҙәмдең Ҡабил исемле улы Хоҙайға буйһоноrға теләмәй һәм матурлығы менән айырылып торған бер һеңлеһен ҡатын итеп алмаҡсы була. Әҙәмдең Хабил исемле улы, тыйылған нәмәләрҙе эшләмә, тип ағаһын иҫкәртә. Ләкин үҙ һүҙле Ҡабил нисек тә теләгенә ирешмәксе була. Уның ныҡымышлығын күргән ҡустыһы, кемебеҙ хаҡлы булыуын асыҡлау өсөн Хоҙайға ҡорбан килтерәйек, тигән тәкдим яһай. Ул замандарҙағы йола буйынса, ҡорбан килтереү өсөн кешеләр бейек тау башына менеп, үҙе өсөн иң ҡиммәтле һаналған, хәләл көсө менән тир түгеп тапкан әйберҙе ҡалдырып китер булған. Әгәр күктән төшкән ут шул әйберҙе йотһа, Хоҙай ҡорбанды ҡабул итте, тип һаналған.

Хабилдың ҙур һарыҡ көтөүе була һәм ул ҡорбан өсөн иң һимеҙ һарыҡын, ә игенселек менән шөғөлләнгән Ҡабил бер шәлкем иген башағын тауға мендереп ҡалдыра. Бер аҙҙан улар тау башына күтәрелә һәм серееп, күгәреп бөткән бер шәлкем иген башағынан башка әйбер күрмәй. Хоҙай ҡабул иткән ҡарарға ене ҡотороп, күҙенә аҡ-ҡара күренмәҫ хәлгә етеп ярһыған Ҡабил ҡустыһын үлтерә. Ҡөрьәндә был хәл шулай тиеп яҙылған: "Һәм хаҡлык менән һин уларға Әҙәмдең ике улы тураһында уҡы. Быуа улар икеһе лә ҡорбан килтерҙеләр. Уларҙың береһенән ҡорбан ҡабул ителде, ә икенсеһенән ҡабул ителмәне. Ул: "Былай булғас, мин һине үлтерәсәкмен", тине. Тегеһе әйтте: "Алла тик тәҡүәлеләрҙән генә ҡабул итә. Әгәр һин үлтереү өсөн миңә ҡул һуҙһаң, мин һине үлтереү өсөн ҡул һуҙмам. Мин бит ғәләмдәр Раббыһы Алланан ҡурҡам. Мин һинең, миңә ҡарата булған гонаһыңды һәм үҙ гонаһыңды алып, һинең ут әһелдәренән булыуыңды теләйем. Был - залимдарҙың яҙаһы". Һәм уның күңеле туғанын үлтереүҙе еңел эш итеп күрһәтте - һәм ул уны үлтерҙе һәм зыян күреүселәрҙән булды. Туғаныныn мәйетен нисек ерләргә икәнен күрһәтеү өсөн Алла уға ерҙе сокоусы ҡарғаны ебәрҙе. Ул: "Ҡайғы миңә! Үҙ туғанымды ерләү өсөн ошо ҡарғалай булырға ла хәлемдән килмәй",- тине һәм ул үкенеүселәрҙән булды".

**Шул мәлдән алып кеше үлтереүселәрҙең гонаһы Ҡабил өләшенә төшә. Бәйғәмбәр: "Бер хаҡһыҙға кемде үлтереүенә ҡарамаҫтан, кеше ҡанын ҡойғаны өсөн үлтереүсенең гонаһының бер өлөшө Әҙәмдең беренсе улына төшә, сөнки үлтерешкә ул юл асты",- тигән.**

**Бөйөк имам Ғаззалиҙың "Воскрешение наук о вере" тигән билдәле әҫәрендә: "Үлгәс гонаһтарын үҙе менән ҡәбергә алып китеүсе бәхетле! Ә үҙе үлеп, гонаһтары мәңге йәшәгән кешегә ләғнәт", тигән һүҙҙәре менән килешмәү мөмкин түгел.**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

# Ғафури мәҙәктәре

## "НЕ ШУТИ, ҒӘЙЗУЛЛА!"

Ауылда Ғәйзулла тигән бабай вафат булған. Ғәҙәт буйынса, бөтә ауыл халҡы хәйер һалырға, туғандарының ҡайғыһын уртаклашырға килә. Кисен карттар мәйет эргәһендә ултырып ҡала. Бер аҙ ултырғас, тәмәке тартыусылар урамға сығып китә, үҙ ғүмерендә лә тәмәкене ауыҙына алмаған Ғәбделхәй бабай бер үҙе мәйет эргәһендә ҡала. Белгән аяттарын уҡып, күршеһенең йөҙөнә ҡарап, шөрләңкерәп ултырған Ғәбделхәйҙың күҙенә карауат һелкенә башлағандай тойола. Был ни хәл, тип күҙен йомоп та ҡарай, асһа, карауат тағы һелкенә башлай. Шул саҡта йөрәге тамам туктарға етә башлаған Ғәбделхәй: "һин не шути, Ғәйзулла, үлгәнһең бит инде", - тип, урамға ташлана.

Урамдағы карттар эштең нимәлә икәнлеген төшөнөргә теләп, карауат аҫтына күҙ һалһалар, унда яңы ғына донъяға килгән ике быҙау яткан икән. Улар торорға иткән саҡта карауатты бер аҙ ҡалҡытып ҡуйғандар икән. Хәҙер Ғәбделхәй ағайҙың үҙен "Не шути" тип йөрөтәләр.

## "БАРМАҒЫ ОСОНАН ҺЫУ АҒА"

Ул йылды Мансур Әхмәҙулловичка уҡытырға беренсе класты бирҙеләр. Мансур ағай бер көндө тәнәфестә ир уҡытыусыларҙы йыйып алды ла зарлана башланы.

- Егеттәр, мин ҡартая башланым, ахырыһы, бөгөн бик ҙур хата ебәргәнемде аңланым әле. Беренсе кластарҙы ҡабул иткәс, уҡыу йылы башында уларҙы иң тәүҙә нәмәләргә өйрәтергә икәнлекте онотоп ебәргәнмен.

- Нимә булды һуң, ниндәй хата? - тибеҙ.

- Әүәлдәге тәртип буйынса, малайҙар менән ҡыҙҙарҙы бергә ултыртабыҙ бит инде, мин дә шулай иттем дә, дәресте башлап ебәрҙем. Дәрестең яртыһы үтеп бара, шунда артҡы партала ултырған ҡыҙ бала: "Уҡытыусы ағай, Рәфкәттең бармағынан һыу аға башланы" - ти. Йүгереп барып ҡараһам, ҡыҙ баланың эргәһендәге малай еңелсә "эш" бөтөрөп ултыра имеш. Бына шунда аңланым инде хатамды. Ғәйеп миндә бит, балаларға иң башта тыштағы туалетты күрһәтергә тейешлекте, нисек һорап сығырға икәнлекте аңлатырға тейеш инем, онотоп ебәргәнмен, - тип үҙен ғәйепләне ҡарт уҡытыусы.

## "УЙСАН СӘЛИМЙӘН"

Ауыл клубында йылына бер тапкыр шахмат турниры булып ала торғайны. Сәлимйән ауылда бик азарт шахматсы иҫәпләнә. Турнир графигы буйынса бөгөн ул колхоз рәйесе Мәжит Сәләхетдин улы менән уйнарға тейеш. Һиһайәт, былар клубта осрашып, уйнарға ултыралар. Уйындың уртаһына еткәс, Сәлимйән ағай йөрөшөн таба алмай интегә. Партнерының түҙемлеге бөтә, сәғәт киске 9 тулып килә, колхоз идараһының ултырышын үткәрһе иҫенә төшә. Шунан ул: "Ярай, Сәлимйән ағай, һин уйлай тор, ултырыш үткәреп килəйем әле", - тип идараға китә.

Сәғәт ярымдан һуң, Сәләхетдинович килеп инә, Сәлимйән ағай һаман йөрөшөн яһамай, "Әҙерәк уйлайым әле", тип тик ултыра.

Шулай итеп, ул көндө, артыҡ ваҡыт исраф итеү сәбәпле, Сәлимйән ағай еңелеүен танырға мәжбүр була.

Иртәгәһен Сәлимйән ағай ырҙын табағындағы иген тейәлгән машинаға ултырып, Акҡүлгә үҙ йомошо менән китә. Юлда барғанда ла теге уйыны иҫенән сыкмай. Кинәт, Табын ауылына килеп еткәс, төшөп ҡала ла, иген бушатып ҡайтып килгән машинаға ултырып, кире ҡайтып китә. Ырҙын табағында йөрөгән колхоз рәйесен табып: "Мин кисә ат менән йөрөгән булһам, Мәжит Сәләхетдинович, һиңә мат була ине" -тип әйтә лә кире Акҡүлгә китә. Шунан һуң Сәлимйән ағайға "Уйсан" тигән почетлы исем тағыла ла инде.

**Марат БАЙМӨХӘМӘТОВ,**

Ғафури районы.



✓*Бөгөнгө күҙлектән ҡарап, дөрөҫөн әйткәндә, ул саҡтағы республика етәкселәре, асылда, Татарстандың иктисади үҫеше өсөн эшләгән булып сыға түгелме?*



**Үткән быуаттың 90-сы йылдарында илебеҙҙә реформалар башланғас, үткәнебеҙҙең "совет осоро" тип аталған мәлендәге тормошобоҙға ҡарап шаҡ ҡаттыҡ. Юҡ, ул йылдарҙы беҙ һис тә инкар итергә тейеш түгелбеҙ, сөнки тап шул осорҙа илебеҙ йылдам үҫеште, камиллашты, хужалыҡ итеүҙең һәм етештереүҙең яңы ысулдарын үҙләштерҙе. Шул уҡ ваҡытта совет осоронда тотош республикаға, төбәккә, халыҡҡа ҡарата үткәрелгән ғәҙел булмаған сәйәсәткә лә күҙ йомоп ҡарай алмайбыҙ. Башҡорт дәүләт университетының төбәк иктисады кафедраһы мөдире, профессор Мәзһәр ИҪӘНБАЕВТЫҢ килтергән дәлилдәре тап шул хаҡта.**

# Беҙ һауған һөттөң

## башҡалар ашаған икән дә

### Ҡаймағы - Татарстанға...

Айырым сәйәсмәндәр, журналистар йыш ҡына ваҡытлы матбуғат биттәрендә йәки былай сығыштарҙа Башҡортостан менән Татарстандың иктисадын сағыштырып, үҙҙәренсә һығымта яһарға ярата. Әммә был ике республиканың иктисадын сағыштырыу бөтөнләй дөрөҫ түгел.

90-сы йылдар башында илебеҙ баҙар иктисадына күсеп, реформалар башланған саҡта был ике республиканың үҫеше ниндәй кимәлдә булғанына диҡҡәт итәйек. Сәнәғәт буйынса алып ҡараһаҡ, ул саҡта Татарстан бөтә тармаҡтар буйынса ла ныҡ үҫешкән республика ине. Беҙҙән айырмалы рәүештә, Татарстанда сәнәғәттең тауар етештереүсе тармаҡтары ныҡ алға киткәйне. Беҙҙә иһә ярымфабрикаттар, асылда сеймал ғына етештерелде. Беҙ ул саҡта Татарстан ғына түгел, шул иҫәптән СССР-ҙың күп кенә республикаларының сеймал сығанағы ғына булып торҙоҡ. Татарстан, мәҫәлән, 90-сы йылдарға "Камаз", "Шевролет", "Ока" машиналар төҙөү, самолеттар, башҡа төрлө тауарҙар етештереүсе комплекстар менән килеп инде. Татарстандағы ошондай заводтар өсөн ҡорамалдар, моторҙар, комплект деталдәр беҙҙә етештерелде, йәғни беҙ машина етештереүсе ҙур предприятиелағы конвейерҙың бер тармағы ғына булдыҡ. Килемде кем күберәк ала, тип уйлайһығыҙ? Әлбиттә, сеймал эшкәртеүсе түгел, әҙер тауарҙы эшләп сығарыусы һәм һатыусы. Беҙҙә етештерелгән продукттарҙың 76 проценты сеймалдан һәм ярымпродукттарҙан торҙо. Республикабыҙҙың ҙур өлөшөн урман биләнә лә, беҙҙә бер ҡулдың бармаҡтары менән генә һанарлыҡ мебель фабрикалары булды, уның ҡарауы, урманыбыҙ бүрәнә көйө иң осһоҙ хаҡҡа ситкә осто. Башҡортостан совет осоронда һәм элек тә йылҡысылыҡ һәм һарыҡсылыҡ буйынса дан тотто. 1990 йылда Баймаҡ районының "Ирәндек" совхозында ғына 37 мең баш һарыҡ бар ине. Хәйбулла, Әбйәлил райондарында ла йылына меңәрләгән тонна йөн әҙерләй торғайнылар. Был райондар Сибай станцияһынан состав-состав һарыҡ йөнөн Татарстанға оҙатты. Тағы ла иң осһоҙ хаҡҡа. Ә күршеләребеҙ ошо йөндәрҙән туҡымалар туҡыны, кейемдәр текте һәм килемдең иң ҙур өлөшөн алды. Татарстан революцияға тиклем дә тире эшкәртеүсе предприятиелары менән дан тотҡан республика. Беҙҙәге мал тиреләре лә шунда осто. Колхоздар-совхоздар үҙҙәренең автотранспорты менән һарыҡ йөндәрен һәм мал тиреләрен Татарстанға алып барып та тапшыра торғайны. Сеймал өсөн урап ҡайтҡан аҡса хатта яғыулыҡ-майлау материалдар өсөн дә етмәне. Һөҙөмтәлә, һарыҡсылыҡ тармағы рентабелле булмай сыҡты һәм юҡҡа сыҡты. Минеңсә, алдағы йылдарҙа һарыҡсылыҡты киренән аяҡҡа баҫтырырға кәрәк.



*Учалы, Әбйәлил, Хәйбулла, Баймаҡ, Йылайыр, Ейәнсура, Күгәрсен райондарында күп кенә колхоздарҙы бөтөрөп, эре-эре совхоздар төҙөнөләр. Совхоздың рентабелһеҙ хужалыҡ итеү ысулы икәнлеген заман иҫбат итте инде. Ә колхоз - ул прогрессив һәм хужалыҡ итеүҙең тәбиғи формаһы. Колхоздарҙы яһалма рәүештә бергә ҡушып, эре-эре совхоздар төҙөү ауыл хужалығына ҙур зыян килтерҙе. Тап шул мәлдән элек-электән ауыл хужалығында эшләгән белгестәрҙе ҡыҫырыҡлап сығарыу башланды. Һөҙөмтәлә, ошо райондарҙан тиҫтәләгән мең-мең кеше эш эҙләп ситкә китеп бөттө.*

Нимә уйлағандарҙыр республикабыҙҙың элекке етәкселәре? Хәҙер уларҙы "ил ағалары" тип маҡтайҙар. Һуң, ил ағалары булып, улар беҙҙең республика өсөн нимә эшләгән һуң? Мин шуға хайран ҡалам. Шул саҡтағы етәкселәрҙең үҙ республикаһына мөнәсәбәтенең эҙемтәләрен әле лә татыйбыҙ. Бөгөнгө күҙлектән ҡарап, дөрөҫөн әйткәндә, ул саҡтағы республика етәкселәре, асылда, Татарстандың иктисади үҫеше өсөн эшләгән булып сыға түгелме? 60-сы йылдарҙан Татарстандың барлыҡ етәкселәре Башҡортостандан сыҡҡан кешеләр ине һәм уларҙың беҙҙәге етәкселәр менән бер төптән эшләүен күреү ҡыйын түгел. Кинәйәләп әйткәндә, беҙ һауған һөттөң ҡаймағын Татарстан ҡулланған икән.

### Колхозмы, совхозмы?

Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, Нуриев ваҡытында беҙҙә ауыл хужалығы емерелде. Күпселеген башҡорттар йәшәгән Учалы, Әбйәлил, Хәйбулла, Баймаҡ, Йылайыр, Ейәнсура, Күгәрсен райондарында күп кенә колхоздарҙы бөтөрөп, эре-эре совхоздар төҙөнөләр. Колхоздар һаҡмар зонаһында ғына ҡалды. Совхоздың рентабелһеҙ хужалыҡ итеү ысулы икәнлеген заман иҫбат итте инде, ул үҙен аҡламаны. Ә колхоз - ул прогрессив һәм хужалыҡ итеүҙең тәбиғи формаһы. Колхоздарҙы яһалма рәүештә бергә ҡушып, эре-эре совхоздар төҙөү ауыл хужалығына ҙур зыян килтерҙе. Был махсус рәүештә эшләнде. Тап шул мәлдән элек-электән ауыл хужалығында эшләгән белгестәрҙе ҡыҫырыҡлап сығарыу башланды. Һөҙөмтәлә, ошо райондарҙан тиҫтәләгән мең-мең кеше эш эҙләп ситкә китеп бөттө. Ул саҡтағы һандарға күҙ һалһаң, һәр бер райондан бер йыл эсендә ситкә китеүселәрҙең һаны 2-3 мең кешене тәшкил итә ине.

Совхоздар ойоштороуҙың бер маҡсаты сеймалды ситкә тоткарлыҡһыҙ ебәреү ҙә булғандыр, ни генә тимә, совхоз мөлкәте дәүләттеке булып иҫәпләнә. Икенсенән, совхоздарҙы ойоштороусылар был ғәмәлен, йәнәһе, дәүләткә бурысы булған колхоздарҙы көрсөктән сығарыу, тип иҫбат итергә маташты. Улайһа, ниңә республиканың төньяҡ-көнбайышында, атап әйткәндә, Дүртөйлә, Илеш, Кушнаренко, Саҡмағош кеүек райондарында бер совхоз да төҙөлмәне. Был осраҡта "ойоштороусылар" үҙ-үҙенә ҡаршы килә. Көньяҡ-көнсығыш райондарында совхоздар был төбәктәге халыҡты үҙ еренән биҙҙереү, асылда, сеймал сығанағы итер өсөн махсус рәүештә эшләнде.

Колхоздар һаҡланып ҡалған төньяҡ-көнбайыш райондарында ауыл хужалығы тотороҡло алып барыла. Улар сәсеүҙе иртә башлай, уңышты иртә йыйып ала, күрһәткестәре лә юғары, хатта теләһәң дә уларҙың колхозын хәҙер емереп булмай. Ер пайын халыҡҡа таратыу мәсьәләһендә был райондарҙа проблемалар юҡ тиерлек. Фермер хужалыҡтары ассоциацияһы төҙергә кәрәк тиҙәр, нимәгә кәрәк ул? Борондан ергә община мөлкәте тип ҡараған башҡорт өсөн бөгөн колхоз иң ҡулайлыһы, хужалыҡ итеүҙең был формаһы үҙ урынын алған. Беҙгә хәҙер реаль, тәбиғи нигеҙҙә үҫешкән, өҫтән күрһәтмә буйынса хужалыҡ итмәгән колхоздарҙы тергеҙеү фарыз.

Хәҙер пай ерҙәрен ауылда йәшәүселәргә өләшеү башланды. Ошо моментты файҙаланып, ерҙе һатып алыу һәм хужалыҡ итеүҙе яйға һалыу маҡсатында колхоз-кооператив системаһын, киреһенсә, камиллаштырырға, нығытырға ғына кәрәк. Фермер хужалыҡтары ла булһын, әммә фермерлыҡты бар кеше лә булдыра алмай. Беҙгә хәҙер ерҙе һаҡлау буйынса закондарҙы нығытырға кәрәк. Революцияға тиклем дә күп ерҙәребеҙ ситтәр ҡулында булып, колхоз-совхоз милке итеп кире ҡайтарылғайны. Инде лә ерҙәребеҙҙән яҙһаҡ, башҡалар уға хужа булһа, ул ерҙәрҙе мәңгелеккә юғалтыуыбыҙ бар. Ҡабат революциялар булмаясаҡ. Әле Әбйәлил районы ерҙәренә ҡурҡыныс янай, асыҡлабыраҡ әйткәндә, Магнитогорск кешеләре төрлө юлдар менән районда ер алып, йорт һала башланы, урындағы халыҡты яйлап-яйлап үҙ еренән ҡыҫырыҡлап сығара. Быға сик ҡуйырға ваҡыт, эш әлеге лә баяғы законға килеп терәлә. Беҙ хатта пай ере булған яңғыҙаҡ кешеләрҙең үлеп ҡалыуы осрағы өсөн дә әҙер булырға тейешбеҙ. Был осраҡта уның өлөшө колхозға күсергә тейеш. Күсеп киткән кешеләргә компенсация түләү мәсьәләһе лә ҡалҡып сығасаҡ. Ер тураһындағы законда дөйөм йыйылышҡа, сходка ҙур вәкәләтлек бирелә. Тимәк, күп кенә нәмәләр үҙебеҙҙән дә торасаҡ.

Әле республикабыҙ төбәктәренән "Беҙҙең ерҙәрҙе әрмәндәр, грузиндар ҡулға төшөрөргә йөрөй", тигән борсоулы сигналдар килә. Ундай сигналдар бая беҙ башта әйткән колхоздар һаҡланып ҡалған төньяҡ-көнбайыш райондарынан түгел, совет осоронда колхоздары бөтөрөлөп, эре совхоздар төҙөлгән төбәктәрҙән килә. Тимәк, ул саҡтағы республика етәкселәре алып барған сәйәсәттең эҙемтәләре һаман да күренә. Күп нәмә киләсәктә урындағы етәкселәрҙән дә торасаҡ. Шул уҡ әрмәндәрҙе, грузиндарҙы беҙгә яҡын юллатырға ярамай. Улар бында килһә, беҙҙең халыҡҡа эш булһын, ярҙам итәйек, тип килмәй, беҙҙең ерҙәргә улар үҙҙәренең йәшәү мөхитен арттырыу, һуңғы сиктә ошонда төпләнеү, йорт һалыу, аҙаҡ туғандарын саҡырып килтереү өсөн аяҡ баҫа. Әзербайжандың Таулы Ҡарабах фажиғәһен иҫләү ҙә етә был урында.

### Бер ҡаҙанда - ике тәкә башы...

Республиканың көньяҡ-көнсығыш өлөшөнә ул саҡтағы етәкселектең ғәҙел булмаған мөнәсәбәте райондар территорияһы нисбәтендә лә күренә. Мәҫәлән, Белорет районын алып ҡараһаҡ, ул үҙе генә ҡайһы бер Европа дәүләттәренән ҙурыраҡ майҙанды биләй. Уның еренә республиканың төньяҡ-көнбайышындағы 4-5 районды алып барып ултыртырға була. Әммә хөкүмәт дотацияһының ҡайһы бер статьяларына бүленгән аҡсаның тигеҙ булыуын иҫәпкә алғанда, территорияһы бәләкәйерәк булған район был тәңгәлдә ота ғына. Әле ҡасан ғына Белорет районының ҡайһы бер төпкөл ауылдарынан район үҙәгенә барыр өсөн Силәбе өлкәһе аша Өфөгә килеп, баш ҡаланан поезд менән Белорет ҡалаһына бара инеләр. Өфөнән Стәрлетамаҡҡа Ырымбур аша барған һымаҡ инде. Бының өсөн кешеләрҙең ике-өс көнө юлға китә торғайны.

Район территорияһының бәләкәй, компактлы булыуының тағы бер ҡулайлы яғы, баяғы колхоз миҫалындағыса, хужалыҡ итеү өсөн уңайлығында. "Һә" тигәнсе бер остан икенсе осҡа барып етәһең, барыһы ла күҙ алдында, тәртип тә һаҡлана. Юҡҡа ғынамы ни сәйәсмәндәр Рәсәйҙәге тәртипһеҙлектәрҙең күбеһен уның саманан тыш ҙур булыуында ла күрә. Майҙан ҙурыраҡ булған һайын, идара механизмы бушай, контроль юғала башлай, күҙ менән ҡаш араһы алыҫлаша.

Шулай уҡ ҡайһы бер район үҙәктәрендәге ҡала хакимиәттәре менән район хакимиәттәрен бергә ҡушыу, минеңсә, алдан етди уйланылмаған яңылыш аҙым булды. "Бер ҡаҙанға ике тәкә башы һыймай", тиҙәр. Ҡала менән район - икеһе ике төрлө категория һәм һәр ҡайһыһы айырым үҫешергә һәм йәшәргә хаҡлы. Былай үҙгәртеп ҡороуҙа шулай уҡ район үҙәктәре ҡалаларҙа урынлашҡан райондар күпкә отолдо. Сөнки республикаға дотацияһынан бар райондарға ла бер үк күләмдә аҡса бүленә.

### Мәскәүҙә - "коммунизм", регионларҙа - емереклек

Бары тик 90-сы йылдарҙан башлап ҡына республикабыҙҙың етештереүсе үҙ сәнәғәт тармаҡтары барлыҡҡа килә башланы. Мәскәү оли-

***✓Нуриев, аграрник булараҡ, ауыл хужалығын юҡҡа сығарһа, Шакиров, сәнәғәтсе буларак, сәнәғәтте юҡҡа сығарҙы беҙҙә. Әле килеп совет осороноң 70-80 йылында эшләнмәгән ғәмәлдәр башҡарыла.***

# ҠАЙМАҒЫН...

гархтары яғыулыҡ-энергетика комплексын ҡулға төшөрөргә әҙер генә тора. Башҡортостан Президентын һайлау кампаниялары ундай көстәрҙең уй-ниәтен бар тулылығында асыҡланы. Беҙҙә әлегә тиклем, шөкөр, республика бюджетын формалаштырыусы нефть һәм нефть химияһы тармаҡтарының контроль пакеттары республика ҡулында. Был йәһәттән республикала акционерҙар йәмғиәттәре төҙөү был тармаҡтарҙы айырым кешеләр ҡулына бирмәҫ өсөн иң мөһим сара һанала. Шулай ҙа ҡайһы бер тармаҡтар буйынса сәнәғәт предприятиеларының контроль пакеттары ситтәр ҡулына күсеп өлгөрҙө. Ул предприятиелар Мәскәүҙә теркәлә һәм һалым да шунда күсә. Дөрөҫөн әйткәндә, Мәскәүҙә - "яһалма коммунизм" төҙөлә, регионлар емерелә.

Ер шарындағы башҡа илдәр менән сағыштырғанда, Рәсәй иң түбән эш хаҡы түләгән ил булып тора. Беҙҙә күберәк ҡул көсө ҡулланыла һәм фәндең тормошта файҙаланыуы, ҡулланылыуы механизмдары бөтөнләй эшләнмәгән. Фән айырым, тормош айырым йәшәй. Фәнде тормошта киң йәйелдереү яңы сәнәғәт тармаҡтары асыуға булышлыҡ итеп, яңы эшсе көстәре урындары барлыҡҡа килер ине. Бына шуның өсөн дә Рәсәйҙә батраклыҡ психологияһы һәм системаһы һаҡланып ҡалған. Беҙҙә хеҙмәт мөнәсәбәттәре быуаттар буйынса эшләнмәгән, камиллаштырылмаған. "Бай-батрак" заманында нисек булһа, һаман да асылы шундай. Шуға күрә, әйтәйек, Мәскәү үҙенең донор төбәктәренең йыллыҡ килеменең иң ҙур өлөшөн һис һүҙһеҙ тартып алғанда ла, таланыусы яҡ "Ҡарауыл!" тип ҡысҡырыу урынына, үҙ тамағын туйҙырырлыҡ ҡына өлөштө үҙендә ҡалдырырға рөхсәт итеүе менән дә риза. Был - батраклыҡ психологияһы.

## Өфөнө ҡотҡарырға, Сибайҙы - үҫтерергә...

Башта әйткәнемсә, Нуриев, аграрник булараҡ, ауыл хужалығын юҡҡа сығарһа, Шакиров, сәнәғәтсе булараҡ, сәнәғәтте юҡҡа сығарҙы беҙҙә. Әле килеп совет осороноң 70-80 йылында эшләнмәгән ғәмәлдәр башҡарыла. Етештереү сәнәғәте үҫешә, автобустар, троллейбустар эшләй башланыҡ. Бында тағы бер мәсьәлә: барлыҡ етештереү предприятиелары баш ҡалабыҙ Өфө тирәһендә туплана башланы. Өфөнө беҙгә ҡотҡарырға кәрәк. Шакиров миллионлы ҡала яһайым, тип барлыҡ сәнәғәт предприятиеларын Өфөгә туплаpны. Өфө, шулай итеп, яһалма рәүештә үҫтерелде. Нимәгә кәрәк булғандыр Сипайлово, Шакша биҫтәләре? Әгәр ҙә ҡаланың халҡы миллиондан артһа, унда идара итеү ауырлаша. 500-600 мең халҡы булған ҡала идара итеү өсөн иң уңайлыһы, экологик яҡтан иң тотороҡлоһо булып иҫәпләнә. Предприятиеларҙы башҡа аҙ үҫешкән ҡалаларға сығарырға кәрәк. Шундай ҡалаларҙың береһе - Сибай. Әле уның яҙмышы ҡыл өҫтөндә тора. Кисекмәҫтән Сибайҙа яңы типтағы сәнәғәт предприятиелары төҙөмәһәк, Сибай тиҙ арала тик пенсионерҙар йәшәүсе ҡалаға әүереләсәк. Ваҡытында гөрләп эшләп-йәшәп ултырыусы Түбә ҡасабаһын, Баймаҡ ҡалаһын юғалтҡан кеүек, сара күрмәһәк, Сибайҙы ла юғалтасаҡбыҙ. Хөкүмәт кимәлендә Сибай өсөн махсус программа кәрәк бында. Әгәр ҙә Сибайҙы юғалтһаҡ, Урал аръяғы районларының күҙ терәп торған ҡалаһы юҡҡа сығасаҡ.

Былтыр беҙ Сибайҙа машиналар эшләү сәнәғәтен үҫтереү мәсьәләһен Президент программаһына индергәйнек, Сибай буйынса Президент хаты үтәлмәне. Бының буйынса иң беренсе булып сибайҙар үҙҙәре ғауға күтәрергә тейеш ине, ниңәлер шым ҡалдылар.

Киләсәктә Урал аръяғында баҡыр эшкәртеү буйынса комплекслы программа төҙөү ихтыяжы бар. Әгәр ҙә баҡыр рудаһын табыуҙы күҙ уңында тотһаҡ, рудаһы тик үҙебеҙҙә эшкәртелергә тейеш. Ошо йүнәлештә Хәйбулла районы территорияһында Аҡъяр менән Бүребайҙы тоташтырған яңы ҡаланың ҡалҡып сығыуын күҙалларға була. Рудаһы Сибайҙа ла эшкәртергә мөмкин. Нисек кенә булмаһын, республикабыҙҙың киләсәге төҫлө металлургия үҫеше менән бәйле буласаҡ. Сөнки нефть яткылыҡтары ныҡ кәмей һәм яғыулыҡ-энергетика комплексын нимәлер алмаштырырға тейешлеген иҫәпкә алһаҡ, төҫлө металлургияны үҫтереү мәсьәләһе үҙенән-үҙе ҡалҡып сыға.

## Трафарет ҡарарҙар заманы үтте

Совет власы туризм тигән төшөнсәне аңламаны, аңларға ла теләмәне. Уны кешеләрҙе ялҡаулыҡҡа өйрәтеүсе, тик күңел асырға, ял итергә генә саҡырыусы ят күренеш тип баһаланы. Шуға күрә беҙҙең 70-се йылдарҙан алып туризмды үҫтереү буйынса яһалған тәҡдимдәребеҙ ҡабул ителмәй килде. Республикабыҙҙың Урал зонаһы өлөшө тарихи яҡтан да, тәбиғи яҡтан да бик уникаль. Башҡортостанда ғына түгел, ғөмүмән, Евразияла ундай урындар юҡ. Шүлгәнташ мәмерйәһе үҙе генә лә Ер шарындағы шундай берҙән-бер урын. Беҙ әле туризмды халыҡ хужалығының иң төшөмлө тармағы икәнлегенаңлау кимәленә етмәгәнбеҙ. Әле Башҡортостан Президенты инициативаһы менән күпме санаторийҙар төҙөлдө. Совет власы осоронда беҙ был хаҡта хатта хыяллана ла алмай инек. Килер бер ваҡыт: улар бар көсөнә эшләп китәсәк һәм республика ҡаҙнаһына ҙур килем килтерә башлаясаҡ. Бер уйлаһаң, беҙҙәге кеүек уникаль санаторийҙар бер урында ла юҡ.

Хәҙер трафарет ҡарарҙар ҡабул итеү заманы үтте. Шуға күрә республикабыҙ үҙенсәлеген иҫәпкә алып, халыҡты эш менән тәьмин итерлек, төшөм килтерерлек барлыҡ эштәрҙе лә атҡарыу мотлаҡ. Был йәһәттән ер пайын алыусылар "Мин үҙ еремдә мотлаҡ рәүештә бойҙай йә арыш, арпа сәсергә, уңышын йыйып алырға һәм күпмелер өлөшөн ҡайҙалыр тапшырырға тейешмен", тип яңылыша. Ер алыу мәсьәләһенә битарафлыҡ ошо трафареттан килә лә инде. Ер алыусы артабан шулай уйлай: "Ҡайҙан техника, яғыулыҡ-майлау материалы, орлоҡ табам, юҡ, минән булмай, һ.б."

Был төптө хата ҡараш. Ерҙе рәсмиләштереүсе урындағы власть әһелдәре лә ер алыусыға бындай талаптарҙы ҡуя алмай. Ер алыусы, хәленән килһә, был урында иген дә сәсә ала, йәшелсә, емеш-еләк тә үҫтерә ала, ерен сабынлыҡ та итә ала, теләһә, шунда санаторий, ял йорто төҙөп ебәреүе лә бар. Иң мөһиме: ер ситтән килеүселәргә арендаға бирелергә һәм һатылырға тейеш түгел.

## Монархияның атаһы - авторитаризм

Рәсәйҙә әле фәнни яҡтан нигеҙләнгән иҡтисади, социаль, хоҡуҡи сәйәсәт юҡ. Көн һайын телевизорҙан Рәсәй Федерацияһының Хөкүмәт ултырыштарын күрһәтәләр, Президент менән Премьер-министр министрҙарҙың отчетын тыңлай, әммә иғтибарға лайыҡ программа, закон әҙерләнгәне һиҙелмәй. Ҡыҫҡаһы, һүҙ өсөн генә, илде ҡайғыртҡан кеше, етәксе ролен башҡаралар. Ҙур илдең министрҙары шул кимәлдә булырға тейешме икән?

Әле килеп региондар өсөн вәкәләтлектәрҙе сикләү тигән нәмә уйлап сығарҙылар. Ул кәрәк түгел: сөнки Рәсәй Федерацияһының Конституцияһы бар, уның 89 субъекты федератив мөнәсәбәттәр нигеҙендә йәшәргә тейештәр. Татарстан менән Чечня үҙҙәренә айырым статус даулай. Ниндәй нигеҙҙә һуң? Рәсәй менән 450 йыл элек тәүге килешеү төҙөгән Башҡортостан башҡаларҙан кәмме ни? Рәсәйҙең башҡа төбәктәре лә хоҡуҡһыҙ булып сығамы ни? Минеңсә, килешеүҙәрҙе яңынан төҙөү зарурлығы юҡ һәм был мәсьәләгә иғтибарҙы йүнәлтергә ярамай. Беҙ конституция нигеҙендә йәшәргә тейешбеҙ. Христиандар - Библия, мосолмандар Ҡөрьән нигеҙендә йәшәгән кеүек. Конституция ҡабул ителгән, федераль власть органдары бар, улар төп закондың үтәлешен тәьмин итергә бурыслы. Был йәһәттән Америка Ҡушма Штаттары беҙгә өлгө булып тора. Улар ике быуат буйына конституция буйынса йәшәй, уның һәр штаты айырым дәүләт булып йәшәй.

Башҡортостан төрлө юлдар менән үҙ иҡтисадын үҫтереү юлдары эҙләй. Был йәһәттән сит ил инвесторҙарын йәлеп итәбеҙ. Әммә бында шуны ла онотторға ярамай: инвесторҙар беҙгә Башҡортостандың иҡтисадын үҫтереү өсөн түгел, үҙ мәнфәғәтен, үҙ файҙаһын ҡайғыртып килә.

90-сы йылдарҙан башлап Башҡортостандың әкренләп булһа ла алға барыуы уның Президенты Мортаза Рәхимов менән бәйле. Бүтән етәксе булһа, республиканы тап ошолай итеп күҙ алдына килтереп булмаҫ ине. Предприятиеларҙы шәхси милеккә таратып биреү еңел, бер көнлөк эш, ә уларҙы һаҡлап ҡалыу өсөн тәбиғи һиҙгерлек, хужа булыу таланты мотлаҡ кәрәк.

"Республиканың 76 процент килеме Мәскәүгә китә, беҙҙең хужалар ҡаршы тора алмай", тип күптәр етәкселекте тәнҡитләргә әҙер генә тора. Әммә был күренештең иҡтисади нигеҙе бар. Беҙҙәге нефть, газ эшкәртеүсе сәнәғәт предприятиелары сит региондарҙың сеймалына нигеҙләнгән һәм акцияларҙың ҙур өлөшө шул региондар ҡулында. Етмәһә, предприятиелар Мәскәүҙә теркәлгәс, һалым да Мәскәүгә китә. Рәсәй закондары шулай эшләнгәс, уға ҡаршы бер нәмә лә эшләп булмай. Һалым урында ҡалырға тейеш тә бит. 76 процент бына шуның арҡаһында йыйыла ла инде. Лужков бармаҡҡа-бармаҡ менән һуҡмаһа ла, олигархтар ярҙамында байыны. Хәҙер килеп Санкт-Петрбургты көсәйтеү маҡсатында предприятиеларҙы шул ҡалала теркәй башланылар. Тимәк, региондарҙы талау сәйәсәте дауам итәсәк әле. Башҡа илдәрҙә һәм дәүләттәрҙә бындай башбаштаҡлыҡҡа юл ҡуйылмай, сөнки уларҙа меңәр йылдар буйы формалашҡан идаралыҡ мәҙәниәте бар, беҙҙә иһә, үкенескә ҡаршы, монархияның атаһы - авторитаризм әле лә йәшәй.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ысынлап та, үҙебеҙ өсөн эшләмәгәс, кем өсөн йәшәгәнбеҙ һуң? Әле лә беҙ һауған һөттөң ҡаймағын Мәскәү, Санкт-Петербург олигархтары ялай. Мәҙһәр Насип улының әңгәмәһенән һуң ошондай һығымта яһарға булалыр. Кем нисек уйлай?**

*ҮӘТ ӘЙ!*

# Димсенән...

## ярҙам һорайыҡмы?

**Телеүҙәк ҡаршыһындағы ЗАГС янынан йыш үтәм. Ундағы төрлө шарҙар менән биҙәлгән машиналар, туй костюмындағы кейәү менән кәләш, ҡупырайып ултырған лимузин - күҙҙе ҡыҙҙыра...**

Һәр саҡ "ауылдарҙа буйҙаҡтар күп", "ҡарт ҡыҙҙар һаны арта", тип яу һалабыҙ. Был проблема Өфө өсөн дә ят түгел. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ: утыҙҙы ҡыуған таныштарығыҙ бармы? Миҫалдар етерлек. Мәҫәлән, мин белем алған уҡыу йортонда күп уҡытыусылар яңғыҙ. Уларҙың барыһы ла тиерлек фән кандидаттары, юғары категориялы, аҡыллы белгестәр. Әммә ғаиләләре юҡ. Сөнки улар карьераны шәхси тормошонан өҫтөнөрәк ҡуйған. Шулай итмәй ни: иреңә иғтибар бүлергә кәрәкмәй, улы йәки ҡыҙы "мультик ҡарайыҡ" тип йонсотмай, сәңгелдәктәге бәпесе маҙаһыҙлап илап ятмай. Ҡыҫҡаһы, карьера мөһимерәк. Әммә... Беҙҙең төп бурысыбыҙ - нәҫел ҡалдырыу. Китапханала төйәкләнгән яңғыҙаҡтарға ҡарап, һорау тыуа. Әгәр улар ғаилә ҡороп, балалар үҫтермәһә, кем уҡыр һуң улар яҙған китаптарҙы? Ғилемде үҫтереү - бер эш, ғаиләле булып, балалы булыу - кешелектең тәү бурысы. Буйҙаҡтар һәм ҡарт ҡыҙҙар артыуына ни сәбәпсе һуң? Йәш ғаиләләрҙең мөхәббәтле тормошо ниңә тарҡала? Күптәребеҙ тормош ауырлығына һылтана. Әммә олатай-өләсәйҙәребеҙ ҙә тылсымсылар иле - Эльдорадола йәшәмәгән бит. Унар-ун бишәр баланы аяҡҡа баҫтырғандар. Һуғыш ауырлыҡтары, аслыҡ-яланғаслыҡ, медицина бөгөнгө кеүек үҫешмәгән, транспорт булмаған ваҡытта ла улар бер-ике бала менән сикләнмәгән.

БСТ каналында яңғыҙаҡтар хаҡында бер тапшырыу күрһәттеләр. 80 йәшлек әбей яңғыҙ йәштәрҙе таныштырып-осраштырып, йәғни яусылап йөрөй. Хәҙерге йәштәр шул хәлгә төштөмө икән ни, тип уйлап ҡуйҙым. Бөйөк Ремарктың "Әйтер инем инде хәҙерге йәштәрҙе! Үткәненә ҡул һелтәп, бөгөнгөһөн күрә алмай, киләсәгенә төкөрөп ҡарай улар" - тигән һүҙҙәр бар. Әллә нисәмә йыл элек әйтелһә лә, XXI быуат йәштәренә лә ҡағыла был.

Нисек, ҡайҙа танышырға, тиһегеҙме. Теләк булһа, мөмкинлектәр табылып тора. Һәр гәзит-журнал битендә танышыу рубрикалары бар, радио-телевидение аша хатта СМС хәбәрҙәр ярҙамында ла табышырға була. Урамда осраҡлы ғына танышып, бына тигән донъя көткәндәр бихисап. Китапхананы икенсе өйөләй күргән баяғы апай-ағайҙар, башын күтәреп, күршеһенә күҙ һалһын әле: бәлки, яҙмышы янында ултыралыр?

**... ЗАГС-ты күптән үтеп киттем. Әммә уның янындағы матур күренеш һаман күҙ алдымда. Ошо бәхеткә өлгәшер өсөн, бәлки, беҙгә лә хәҙер димсе-әбейҙәрҙән ярҙам һорарғалыр, ә?**

**Резеда КҮЗБӘКОВА.**

✓*Ҡасандыр шиғриәтте Алла һүҙенә тиңләгәндәр. Бының әтнәкәһе бар, әлбиттә. Шиғыр ғаләмдең үҫеш, әйләнеш, хәрәкәт ритмикаһы ҡанундарына тоташмаған тиһеңме?*



# Уйланыуҙарым



**26 март**

"Демократия" - йәшлегебеҙ идеалы ине. Хәҙер иһә кеше аңында берәүҙәрҙең икенселәр иҫәбенә байыуы- демократия була, тигән фекер ныҡынды. Уны демократтар үҙҙәре шул көнгә төшерҙе лә инде. Нәҡ шул арҡала халыҡ власҡа ла шикләнеп ҡарай. Ә тормош нәҡ уларҙың ҡарарҙарына бәйләнгән. Ниндәйҙер ғәмәлгә, хыялыңа ирешәм тиһәң, мотлаҡ бүтәндәрҙән өҫтөнөрәк статуслы булырға тейешһең, тигән һығымта тыуа.

Урталай бүленгән йәмғиәт бер-береһенән алыҫлаша бара. Ә илдә 4 млн. ҡарауһыҙ балалар барлығы билдәле. Һәм шул балалар, әгәр тере ҡалһалар, 10-12 йылдан өлкәнәйәсәк. Ул сағында йәмғиәттәге тиңһеҙлек буржуазия менән крепостнойҙар араһындағы айырма кимәленә етәсәк. Йәмғиәттең граждандары сифатына генофонд ныҡ йоғонто яһай ул. Билдәле булыуынса, XX быуат өс революция, граждандар һуғышы, биш һуғыш, өс репрессия кисерҙе.

Улар иң талантлы һәм әүҙем шәхестәрҙең башына етте. Хәҙер бына йомшағыраҡ хәсиәтле кешеләрҙең фекере, мәнфәғәттәре менән иҫәпләшмәү күренеше күҙәтелә. Милли проекттар ҙа йәмғиәттең уйлы кешеләре белдергән ризаһыҙлыкты бер аҙ һүрелдереү маҡсатынан ғына барлыҡҡа килгән кеүек. Дөрөҫ, был һәйбәт идея тормошҡа ашырылһа, президенттар илебеҙ тарихында ыңғай геройҙар сифатында ҡаласаҡ. Беҙ бит тормош тик түрәләр ихтыярына ғына бәйле, бөтә нәмә улар ҡулында, тигән фекергә күндерелгән халыҡ. Тикшеренеүселәр бөгөнгө сағыштырмаса тотороҡлолоҡтоң оҙаҡҡа бармауы ихтимал, тип тә ебәрә. Бер йәнә 15 йылдан яңынан мал бүлеш башланыуы бар, тип хәүефләнә. Ул саҡта ер өҫтөндә үҙе өсөн генә ожмах төҙөү хоҡуғы берәүгә лә бирелмәгән, тигән хәҡиҡәт йәнә ҡалҡып сығырмы?

**3 апрель**

Сәләмәт булыу өсөн кишер ашап ҡына йәшәргә кәрәк, матур булам тиһәң, көн һайын гимнастика яһарға, иртән тороп йүгерергә, эсмәҫкә, тартмаҫҡа кәрәк. Ә бәхеттең рецепттары бармы һуң? Был тәңгәлдә ысулдар уйлап тапҡан кеше юҡ әле. Ә кешеләрҙең һәммәһе лә бәхет көтөп йәшәй. Ғүмер буйы көткәндәр ҙә бар. Бөйөктәрҙән берәү әйтмешләй, әгәр бәхет йорто төҙөп ҡуйһалар, уның иң ҙур бүлмәһен көтөү бүлмәһе итергә кәрәк ул.

Буржуйҙарҙың йәмрәйешкән йөҙөнә ҡараһаң, бәхетте аҡсаға ла һатып алып булмауына инанаһың. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр, бәхет йәшәгән урынға бәйле икән ул, тигән һығымта яһай. Уларса, иң бәхетле кешеләр Мальтала һәм Данияла йәшәй. Иң бәхетһеҙҙәре - Зимбабвела һәм...Украинала. Төрлө илдәрҙә йөҙәр мең кешенән һорау алыу шуны күрһәтә икән. Миңә ҡалһа, бәхет төшөнсәһенә беҙ үтә ҙур талаптар һалабыҙ. Бәхет, минеңсә, бәхетһеҙлектән азат булыу. Бәхет сәғәт кеүек ул, механизмы ни тиклем ябай булһа, шул тиклем оҙағыраҡ хеҙмәт итә.

**6 апрель**

Ҡапма-ҡаршылыҡлы рухи ҡиммәттәрҙән хасил, үҙ-ара йоғонто менән байытылған Евразия мәҙәниәтенең тамырҙары уртаҡ. XI быуатта Евразия Дала ҡыпсаҡтарының мәҙәниәте йоғонтоһонда йәшәй. Дәште Ҡыпсаҡ бик ҡеүәтле держава була. Ырыуҙарға Дала ғәскәрҙәре, хандар етәкселек итә, һәр төр мәҙәни һәм сәйәси өлкә улар ихтыярына бәйле була. Бында матриархат ҡалдыҡтары хөкөм һөрә: йыйындарҙа ҡарарҙар ҡабул итеүҙә ханбикәләр ҙә ҡатнаша. Диндәре - тәңресселек, бик ҡатмарлы инаныстар системаһы. Кешеләр донъяны стихиялар берҙәмлеге тип күҙаллай. Һәр стихияның үҙ тәңреһе бар. Һәр тәбиғи күренеш Хоҙай ҡөҙрәтендә. Байлыҡтары - көтөү-көтөү мал. Улар байтаҡ ҡына цивилизациялы боронғо халыҡтарҙы буйһондороп тота. Нисек өлгәшә һуң улар быға? Эш, минеңсә, Дала халҡының культура үҙенсәлегендә.

Билдәле булыуынса, боронғо Рим культураһы Аҡылды идеаллаштыра. Һиндостандың рухи культураһы өсөн төп маҡсат - юғары көс Брахман менән берләшеүгә өлгәшеп, ғазаптарҙан ҡотолорға өйрәнеү. Хәҙерге заман Көнбайыш культураһы өсөн иң юғары идеал ролен матдилыҡ, аҡса культы үтәй. Ислам бәндәне баҡыйлыҡҡа әҙерләй. Христиан культураһының идеалы - йәнде һаҡлап ҡалыу (спасение души).

Ҡыпсаҡтыҡы иһә - империя фекерле культура. Идеалдары - Йыһан хәрәкәте ҡатнашсыһы булыу. Монгол культураһы - хәрби өҫтөнлөк. " Ҡыпсаҡтар ғына дошман, ә ҡалғандар - ҡол!" - Сыңғыҙхандың ошо лозунгыһы үҙһүҙле халыҡты тармар итеүгә йүнәлдерелә лә инде. Ә бит тәбиғәт менән дә, Йыһан менән дә аралашыу ысулдарын үҙләштергән, Баҡыйлыҡ даирәһендә үҙен мәртәбәле тотҡан ҡыпсаҡтарҙың рухи ҡөҙрәтенә альтернатива булырлыҡ рухиәтте бик күп быуаттар бер кем дә тәҡдим итә алғаны юҡ әле.

Рәсәй тарихы тарихи ваҡиғалар хаҡында һөйләгәндә Киев дәүләтен телгә ала, татар-монгол баҫҡынсылығы хаҡында һөйләй, ә бөйөк Ҡыпсаҡ цивилизацияһы хаҡында ләм-мим. Уларҙы йыш ҡына татарҙар тип тә атап ебәрә урыҫ тарихсылары. Ә бит ҡыпсаҡтар татар түгел, улар айырым милләт һәм дәүләт булған. Ҡытай, Иран, Византия, Һиндостан культураларынан кәм булмай ҡыпсаҡтарҙың ҡаҙаныштары. Тамырҙары, традициялары көслө була уның. Дөрөҫ, тула, тире, ағас, йәнлек тиреләре таштарҙан аҙыраҡ ғүмерле, әммә быға ҡарап ҡына ҡыпсаҡтарға ҡырағайлыҡ мөһөрө баҫыу ғәҙелһеҙ булыр ине. Бында социаль институттар, йәмғиәттең йәшәү формаһы һәм принциптары ныҡлы ҡанунлашҡан була. Чиндар иерархияһы, социаль баҫҡыстар, хәрби тәртип, дипломатия һәм, әлбиттә, донъяны, ғаләмде камил аң менән ҡабул итеү - былар бөгөнгөләр ҙә төшөнөп бөтмәгән кимәлдәге йәшәү ҡағиҙәләре лә баһа.

Идеалист дала кешеләренең юлы көрсөккә терәлә. Ил сигендәге ҡапма-ҡаршылыҡтар йырып сыҡҡыһыҙ кимәлгә етә. Әммә халыҡтың юҡҡа сығыуы - кешеләренең дә ҡырылып бөтөүе тигән һүҙ түгел әле. Далаһы монголдарҙан тапалған халыҡ урыҫ, башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡумыҡ, венгр, болгар, балҡар, татар һәм башҡа милләттәр эсенә инеп һеңергә мәжбүр була.

Ә бит VI быуат аҙаҡтарында ғына ла ҡыпсаҡтар ҡулы аҫтындағы төрки ҡағанаттың сиктәре Көнбайышта Византия, Көньяҡта Фарсы һәм Һиндостан, Көнсығышта Ҡытай менән сикләнгән була. Был дәүләттәрҙең яҙмышы асылда Дәште Ҡыпсаҡ тарихынан айырылғыһыҙ. Нәҡ Дәште Ҡыпсаҡ яҙмышындағы ҡырҡа боролоштар арҡаһында Евразия һәм кешелек тарихы өр-яңыса формалаша ла инде.

Ана шул үҙһүҙлерәк, әммә бөгөн беҙ белгән милләттәргә ҡан һәм рух индергән халыҡтың башҡортлашҡан ярсығы мин.

**10 апрель**

Росстат уҙған йыл статистикаһын иғлан итте. Рәсәйҙә кемгә йәшәү рәхәтерәк, тигән һорауға яуап бар: чиновниктарға. 2005 йылдың уртаса эш хаҡы - 9500 һум. Ә түрәләрҙеке - 16 612 (премияһыҙ). Уларҙың эш хаҡы уҙған йылда 41 процентҡа артҡан. Ә халыҡтың күбеһе 2 меңгә көн күрә. Пенсионерҙар 2300 тирәһе аҡсаға дарыуҙар алырға, тамағын туйҙырырға, кейенергә, ял итергә, мәҙәни талаптарын ҡәнәғәтләндерергә, коммуналь хеҙмәткә түләргә мәжбүр.

Был ғәҙелһеҙлек берәүҙе лә борсомай. Хөкүмәттең матбуғат хеҙмәте етәксеһе Евгений Ревенко "халыҡ менән түрәләрҙең эш хаҡы араһындағы үтә ныҡ айырмалыҡты нисек баһалайһығыҙ?" тигән һорауға "Беҙгә ундай һандар билдәле түгел", тип яуап бирә.

2006 йылда депутат ғали йәнәптәре, министрҙар ай һайын кеҫәһенә 90 мең һум һаласаҡ. Ҡайҙа ҡуялар икән? Күҙ алдына килтереү ҙә ҡыйын. Үәт, замана!

**12 апрель**

Олигархтарға уңыш күктән төшөп кенә тора. Рәсәй Президенты уларҙы Кремлгә йыйып һөйләште. Улар кәңәшләште, бәхәсләште хатта. Енәйәт юлы менән атҡарылған бизнесты "таҙартыу" өсөн йәнә юлдар асылды. Президент капиталистарға мәғариф өлкәһен тапшырҙы. Эш шуға барып еткәс, илдең хәле ни сама булыуы аңлашыла инде. Әллә Милли проект тигәндәре мал бүлешеү генәме? Белем сифаты хаҡында бер кем һөйләмәй. Һүҙ аҡса хаҡында ғына бара.

Илебеҙ башлығының ҡарары шундай. Ә кем президентҡа ҡаршы әйтә алһын?

Ә тегеләрҙең аҡсаһынан ҡан еҫе килә. Стабфондты тотонһаң булмаймы икән ни мәғарифты тергеҙеү маҡсатына?

**10 май**

Замандаштарыма хөкүмәттең халыҡ тормошон яҡшыртыу маҡсатында уйлап тапҡан идеяларын күп күрергә тура килде. 80-се йылдарҙағы "Аҙыҡ-түлек программаһы" иҫтә ҡалған. Бер йәй һатыуға тауыҡтар сығара башланылар. Уны деликатес һанаған халыҡ, әллә тамаҡ яғы ысынлап та арыуланыр микән, тип ышана биреп ҡуйҙы. Көҙгә табан тауыҡҡа әйләнеп тә ҡарамаҫлыҡ хәлгә етелде.

Горбачевтың "Перестройка" иғлан итеүе хәтерҙә. Ул саҡта радиола эшләй инем. КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты беҙҙән үҙгәртеп ҡороуҙы сағылдырыуҙы талап итә. Партия директиваһын ентекле өйрәнеп тә ҡарағайным ул саҡ, ләкин халыҡтан нимә талап ителеүе һис аңлашылмай. Дәүләттең идеялары иғлан ителә торҙо, халыҡҡа ярҙамы тейеү генә түгел, зыяны ҡағылып, юғала торҙо.

Бөгөн яңы үҙгәреш - капитализм... Халыҡтың ҡайһылыр бер өлөшө этеп-төртөп быға яраҡлашты буғай. Икенсе өлөшө юғалып ҡалды, киләсәккә өмөтө һүнде. Нефте йылға булып сит илгә аҡҡан илдең граждандары ни өсөн матди ҡытлыҡтан интегә? Ғаиләңде етеш йәшәтеүгә өлгәшер өсөн тотош ғүмерең дә етмәҫ. Фатир һатып алыу, балаларыңды уҡытыу өсөн аҡса еткерермен тимә. Ә аҙ хаҡлы пенсия алыусыларға нисек булышырға? Кремль ошондай шарттарҙа Милли проект иғлан итте. Эйе, был халыҡтың борсолоуҙарын бер аҙ һүрелдерергә маташыуҙыр.

Ярар, сәйәсәт һәм сәйәсмәндәргә ҡул да һелтәнек, ти. Иң борсолдорғаны шунда, беҙҙең халыҡ көс һалып, ниндәйҙер матдилыҡ тыуҙырыуҙан да дүнде. 4 млн. эшкә яраҡлы кеше МВД, МЧС, ФСБ системаһында хеҙмәт итә. Бындай институттарһыҙ дәүләт булмай, әлбиттә. Әммә улар матди ҡиммәттәр булдырмай. Ә охранниктар? Аҡса алыштырыу пункттары, казино кеүек "мөһим" ишектәр төбөндә әзмәүерҙәй ирҙәр баҫып тора. Дәүләттең айырыуса мөһим объекттарын һаҡлау мотлаҡ та булһын, ти. Ә тегеләре? 1 миллион эшкә яраҡлы ирҙәр рәшәткә артында. Илдең эшкә яраҡлы 20 млн кешеһенең яртыһы бөтөнләй эшләмәй.

Росстатта, шөкөр, ыңғай, мәғлүмәт тә бар. Байлыҡҡа табыныу яйлап артҡы планға күсә бара. Йәштәр ғаилә ҡиммәттәренә, әхләҡи принциптарға йөҙ тотоу яғын һайлай.

**20 май**

Президент Путин Федераль йыйынға ебәргән етенсе Хатында тәү тапҡыр реформаларҙың төп маҡсаты - халыҡтың йәшәү шарттарын яҡшыртыу, тине. Ә ул быны нисек тормошҡа ашырырға йыйына һуң? Былтырғы хатындағы дәүләт менән идара итеүҙе камиллаштырыу, чиновниктарҙың эш урындарын бизнес тип һанаған "һауалы кастаһы" менән көрәш талаптары тормошға аштымы ни? Бәлки хөкүмәт, Дума, Федераль совет ағзалары араһында ултыралыр, былтыр Путин тәнҡитләп телгә алған "һауалы каста" вәкилдәре?

Ысынында, ил башлығы ниндәй генә ыңғай идея менән янмаһын, тирә-яғындағылар быларға ҡарата һуҡыр ҙа һаңғырау булһа, алға китеш булмаясаҡ. Путиндың "халыҡты һаҡлауға" матди сығымдар кәрәклеген телгә алыуы ниндәйҙер оптимизм уята, барыбер.

РФ-ның Генераль прокуроры В.Устинов коррупция ойошторған енәйәтселектең милли бәләгә әүерелеүен телгә алды. Путин иһә хөкүмәттең был хәшәрәттәргә аяуһыҙ буласағын, һөйәлдәренә баҫасағын, дөйөм байлыҡтың паразиттары булып көн итеүҙән тыясағын белдерҙе. Һәйбәт ниәт. Тик... Былары ла, президенттың былтырғы талаптары һәм тәҡдимдәре кеүек, ҡоро хәбәр генә булып ҡалмаҫмы?

Ҡараҡтар, юғиһә, ҡурҡыуҙы ла, оятты ла юғалтты. Ә бит СССР заманында КПСС Үҙәк комитетының Үҙәк ревизия комиссияһы киләсәген ишеткән министрҙар һәм чиновниктар һалҡын тиргә бата ине. Хәҙер иһә күп ерҙә ике төрлө бухгалтерия алып барыла, ти бит. Ә ҡараҡтарҙың "мөлкәтен конфискациялау" тигән ҡанун енәйәт кодексынан бөтөнләй төшөп ҡалды. Бер нисә күргәҙмә яза булыр ул, әммә бизнес менән криминал, ҡайһы бер власть органдары араһындағы илебеҙ именлегенә янаған мөхәббәт экстазын тиҙ генә өҙә алмаҫтар кеүек.

**26 май**

Әҙәбиәткә беҙ фекер һәм күңел синтезынан тыуған уйҙырма тип ҡарарға өйрәнмәгәнбеҙ. Был уйҙырманың, әлбиттә, үҙ ҡанундары бар. Әҙәби даирә ниндәй генә һәм кем генә уйлап тапҡан хыял емеше булған хәлдә лә, асылда, тормоштоң һәр бер институты кеүек үк, тик әҙәбиәт кенә талап иткән ҡағиҙәләргә таяна. Жанрҙар үҫеше законы тип атала ул. Беҙҙә, нилектәндер, бөтә нәмәгә, хатта милли әҙәбиәттең йөҙөк ҡашы булған поэма жанрына ла "оҡшай-оҡшамай, тормошсан-тормошсан түгел", тигәнерәк күҙлектән ҡарау ғәҙәте бар. Әйтергә теләгән фекерҙе публицистика жанрына ла һалып була ул, әммә шағир рифмалаштырылған публицистика менән хәбәр һатыуҙан ары торорға тейеш.

Ҡасандыр шиғриәтте Алла һүҙенә тиңләгәндәр. Бының әтнәкәһе бар, әлбиттә. Шиғыр ғаләмдең үҫеш, әйләнеш, хәрәкәт ритмикаһы ҡанундарына тоташмаған тиһеңме? Шағирҙың эске аң ритмикаһы, моғайын, ғаләмдең йәшәйеш ритмикаһы камиллығы менән ауаздаштыр. Үкенескә ҡаршы, беҙҙең әҙәбиәт ғилеме һаман булһа башҡорт шиғриәтенең структураһына инә алғаны юҡ әле.

Беҙҙә, һирәк булһа ла, шиғыр яҙа белеүселәр бар. Уның художестволы асылын таға-

**Тамара ҒӘНИЕВА**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# БАЛА АЛДЫҠ ТА...

## аҡсалы булдыҡмы?



**- Мин зато атайым менән әсәйемдең үҙ балаһы, ә һине һатып алдылар.**

**- Зато улар минең өсөн аҡса ала. Мин булмаһам, һиңә велосипед та һатып ала алмаҫтар ине...**

**- Мине зато әсәйем яратып ҡына тора, ә һинекеләр ташлап киткән...**

**Тәбиғәттең сыуаҡ ҡояш нурҙары менән һәр йән эйәһенә берҙәй тигеҙ йылмайған сираттағы бер көнөндә урамда сыр-сыу килеп уйнаусы бала-сағаға ҡарап, "Эй, бәхетле саҡтары!" тип һоҡланып, тамаша ҡылып килгәндә, ошо һүҙҙәрҙе ишетеп ҡалғас, күңелемдә ниҙер шыртлап һынды ла, уның урынына осһоҙ-ҡырыйһыҙ уйҙар инеп ояланы. Мөхәббәттән яралған "үҙ бала" менән һатып алынған "тауар бала" араһындағы һөйләшеү ҡабат-ҡабат хәтеремә әйләнеп ҡайтты. Икеһе лә бер үк ғаилә мөхитендә үҫһәләр ҙә, ҡан-йән тигеҙһеҙлеген генә түгел, мөнәсәбәт айырмалыҡтарын да тойорға мәжбүр ителгәне был кескәй йәндәр ошондай һөйләшеүҙәрҙең киләсәккә ниндәй эҙемтәләр менән барып етерен аңламайҙыр шул әлегә.**

**"Башҡортостан Республикаһында патронат тәрбиә тураһында"ғы закон сыҡҡас, "Аҡсаға ҡыҙыҡтырып, балалар таратабыҙ ҙа, ваҡытлыса тәрбиәгә биреп, кеше яҙмышы менән уйнамайбыҙ микән?" тигәнерәк фекерҙәр тыуҙы. Ят баланы ғаиләһенә алғас, үҙенекеләй йөрәгенә ҡыҫып, тейешенсә тәрбиә, һөйөү, наҙ биреп, оло тормошҡа лайыҡлы итеп сығарырмы һәр "тәрбиәсе" ата-әсә? Әллә яҙмышы тарафынан былай ҙа ғәйепһеҙгә ҡыйырһытылған етем әкиәттәге "аҫрау бала" хәлендә ҡалырмы? Баланы "ваҡытлыса" тәрбиәгә алып, мәле еткәс, ҡабат тапшырыу, нисектер, малға булған мөнәсәбәтте хәтерләткәндәй. Ошо уйҙарыма яуап эҙләп, патронат ата-әсәләрҙең уй-маҡсаттары, тәрбиәгә алынған балалар тормошо менән ҡыҙыҡһынып, бер нисә кешегә мөрәжәғәт иттем.**

**Минзәлә ҒӘНИЕВА, Кушнаренко районы:**

- Үҙебеҙҙең бер генә ҡыҙыбыҙ бар. Ул хәҙер үҙ ғаиләһе менән йәшәй. Ейәнебеҙ мәңгелеккә беҙҙең аранан киткәс, донъябыҙ йәмһеҙләнеп, бушап ҡалды. Сабый яратыуға танһығыбыҙ ҡанмаған икән. Хәйер, кеше йөрәгендә балаға һөйөү тойғоһо ҡасан да булһа кәмей микән? Ейәнем урынына уллыҡҡа малай алдыҡ, иптәшкә ҡыҙ ҙа булһын, тип, йәнә барғайныҡ, өс игеҙәк алып ҡайттыҡ. Күңел киң булһа, урын етә ул - иптәшләшеп үҫергә тағы балалар алдыҡ. Бөгөн һигеҙ балаға атай-әсәй тәрбиәһе, өй йылыһы, аҡыл, тәрбиә, белем бирергә тырышабыҙ. Башта балалар йортондағы дуҫтарынан айырылып китеү, йәшәү урынын алыштырыу ауыр булыр, тип борсола инек. Барыбыҙ ҙа әҙәм балаһы бит, тормош бороloштарына яраҡлашырға тыуғанбыҙ. Балалар бигерәк тә тиҙ өйрәнде. Уллы булыуыбыҙға - 10 йыл, өйөбөҙгө ҡыҙҙар ҡайтыуға 9 йыл тула. Бер нимәнән дә ҡурҡмайынса, был хаҡта уйлап та тормай алдыҡ беҙ уларҙы. Ситтә йөрөй-йөрөй үҙ туғаныңдан да ситләшеүең мөмкин, аралашып йәшәй-йәшәй ете яттың да иң яҡын кешеңә әйләнеүе билдәле. Береһен дә ятһынмайбыҙ, һәр ҡайһыһы берҙәй ҡәҙерле.

**Фәүзил ФӘЙЗИЕВ, Өфө ҡалаһы:**

- Хәҙерге заманда бала алып тәрбиәләүҙең ҡурҡыныс яҡтары күп. Элек балалар йортона йышыраҡ һуғыш юғалтыуҙары, социаль етешһеҙлектәр арҡаһында етем ҡалғандар барып эләкһә, бөгөн был балаларҙың күбеһе - енси бәйһеҙлектән, эскесе ата-әсәнән тыуғандар, "ата-әсә" хоҡуғынан мәхрүм ителгәндәрҙән тартып алыныусылар. Ә ундайҙарҙан ниндәй балалар тыуыуы билдәле инде. Шуға ла американдар, мәҫәлән, Рәсәй балаһын тәрбиәгә алғанда иң тәүҙә уның ҡанындағы спиртлы эсемлектәргә булған ферменттарҙы, ВИЧ ауырыуҙары билдәләрен тикшерәләр. Шулай уҡ ҡандан күсеүсе урлашыу, алдашыу кеүек енәйәтсел ғәҙәттәр ҙә бар.

Ваҡытлыса тәрбиәгә, йәғни күпмелер йылға килешеү төҙөп, бала алыу тигәнде бер нисек тә ҡабул итмәйем. Шул бала урынына үҙегеҙҙе йәки үҙ балағыҙҙы ҡуйып ҡарағыҙ әле. Нисәләр йәшеңә тиклем һине бер ғаилә ҡарай һәм, мәле еткәс, балалар йортона кире тапшыра. Аҙаҡ бүтән ғаилә алыуы ихтимал. Ә бит һәр ғаиләлә төрлөсә тәрбиә, төрлө мөхит. Бала психологияһы теүәл генә йүнәлештә камиллашмай. Төрлө яҡҡа ауышып, үҙ фекерен, үҙ юлын таба алмаған кеше үҫә. Быndай мөнәсәбәтте мин, ғөмүмән, кешесә тип танымайым. Етем баланың балалар йортонда ғына йәшәүе һәйбәтерәк, минеңсә.

**Роза һәм Илдус МАЛИКОВТАР, Дыуан районы:**

- Күпме ҡатын әсәй булыуҙан, ә нисәмә ир атай булыу бәхетенән мәхрүм. Үҙ балаһын ҡулдарына алып бағыр өсөн ниҙәр генә эшләмәҫ ине улар. Әммә сит баланы тәрбиәләүгә һәр кем дә йөрьәт итә алмай. Ун баланы тәрбиәгә алғас, беҙгә лә төрлө хәбәрҙәр ишетергә тура килде. Берәү ауырыуҙарға, икенсеһе енәйәттәргә бәйләп, балаларҙың киләсәген юрап маташты. Әммә беҙ торған һайын шуны нығыраҡ аңланыҡ: ниәт итеп алғанбыҙ икән, шикшөбһәләргә урын да булырға тейеш түгел. Хеҙмәткә өйрәтеп, төрлө сараларҙа ҡатнаштырып, һәр ҡайһыһының һәләтен үҙҙәренең теләге аша асып тәрбиәләйбеҙ. Бер-береһенә апай-ағай, һеңле-ҡусты тип, туған итеп өндәшәләр. Уҡыуҙа ла, эштә лә, иптәштәре араһында ла ярҙам итешеп йәшәйҙәр. Башҡорт халҡында элек етемдәр йорто бөтөнләй булмаған. Үҙҙәренең ғаиләһендә унар-ун икешәр бала үҫһә лә, етем ҡалған туғандарын ситкә тибәрмәгән, үҙ янына алған. Күмәк ғаиләлә туғанлыҡ хисе, дуҫлыҡ, кешелеклелек кеүек рухи ҡиммәттәр ныҡ үҫешә.

**Миләүшә АСАЕВА, Туймазы ҡалаһы:**

- "Етем бала аҫырағансы, етем быҙау аҫыра" тиҙәр. "Аҫраған быҙау артҡа тибә" тигәне лә бар. Етем баланан ни көтөргә була?

Уртансы апайым икенсе балаһын тапҡанда үлеп ҡалды. Оло апайым, балаларҙы айырмайыҡ тип, икеһен дә үҙенә ҡарарға алды. Туғыҙынсы синыфты тамамлағас, уҡырға индереп, ҡыҙҙы үҙемә алып ҡайттым. Бер аҙ йәшәне лә, ятаҡҡа күсереүемде һораны. Тәр-типһеҙ йәштәргә эйәреп, төн уртаһында ҡайтыуы хаҡында ишеткәс, боҙолоп ҡуйыуынан ҡурҡып, кире үҙемә алдым. Шул мәлдә ишетмәгән һүҙ ҡалманы. Имеш, мин уның "етемлек" аҡсаһын үҙ файҙама тотонам, ятаҡҡа түләмәҫ өсөн үҙемдә торғоҙам. Имеш, үҫеп еткәс кенә иҫемә төшөргәнмен... Мәсеткә йөрөтөп, дингә ылыҡтырырға тырышып, төрлөсә аңлатып ҡараным - тыңламаны. Ташлап сығып китте.

**Камил ДАУЫТОВ, Әлшәй районы:**

- Балаларыбыҙ үҫеп, таралышып бөткәйне, йәп-йәш көйө әбей менән бабай кеүек торҙоҡ та ҡалдыҡ. Шәхси эшебеҙ булғас, аҡса ла бар, икебеҙгә өй ҙә иркен, тик балалар булмағас, күңелһеҙ. Иптәшкә бер малай алдыҡ. Рәхәтләнәбеҙ хәҙер, ул да шат. Башҡаса балалар йортона барғыһы ла килмәй. Аҡсаһы ла, даны ла кәрәкмәй. Ул беҙгә иптәш, терәк булһа, ә беҙ уға ғаилә тәрбиәһе, бәхетле киләсәк бирә алһаҡ - шул еткән. "Патронат тәрбиә тураһында" закон сыҡҡас, аҡсаға ҡытлығып йәшәүселәр, йыш осраҡта, ана шул түләүенә ҡыҙығып бала ала. Әммә камил кешене сикләнгән ваҡыт арауығында ғына тәрбиәләп булмай. Етемдәрҙең ете ҡат күңеле аҫтындағы етмеш төрлө кисерешен дөрөҫ аңлар өсөн үҙеңә лә етмеш төрлө тәрбиәүи һәләткә эйә булыу, ә етемдәргә иһә һәр йәһәттән һаҡ булыу мөһим.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

Донъялағы иң ҡәҙерле кешеләре - ата-әсәһе тарафынан яҙмыш ҡуйынына ташланған бала күңелендә үпкә, кәмһенеү, һалҡынлыҡ һәм яңғыҙлыҡ хисе барлыҡҡа килә. Ата-әсә, ғаилә йылыһынан мәхрүм үҫкән балала бәлиғ булғанға тиклем үк ҡасандыр уны йәберләгән, бәхетһеҙлеккә дусар иткән ғәҙелһеҙ йәмғиәткә нәфрәт тойғоһо уяна, әкренләп үс алыу теләге лә формалашырға мөмкин. Бик күп проблемаларҙың, бигерәк тә ғаилә ҡороу өлкәһендәге мәсьәләләрҙең, енәйәттәрҙең килеп сығыуы шуға бәйле. Үҙ йөрәге менән тойоу түгел, ата-әсәһен танып та белмәгән көйө ғаилә тәрбиәһен кемдән өйрәнһен дә, ҡайҙан белһен инде ул...

Статистика буйынса, иң күп етем балалар - Рәсәйҙә. "Кескәй" халыҡтың (ә улар беҙҙә 29 миллион) яртыһын тиерлек етемдәр тәшкил итә. 15 миллионға яҡын бәләкәс Рәсәйле социаль етемдәр рәтендә.

Башҡортостанда 18 мең бала ата-әсә наҙынан мәхрүм. Һуңғы мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, ҡарауһыҙ һәм етем ҡалған 11 448 бала опека буйынса тәрбиәлә, 3 655-е уллыҡҡа алынған.

Балалар йортонда ниндәй генә уңайлы шарттар булдырылмаһын, бала өсөн ғаилә һәм өй йылыһын бер нәмә лә алмаштыра алмай (хатта ул уның тыуған ғаиләһе булмаған осраҡта ла). Мәғлүм, бары матур тәрбиә традицияларын һаҡлаусы яҡшы ғаиләләр генә лайыҡлы шәхес үҫтерә ала.

Бала алған ғаиләләргә дәүләттең дә ярҙамы (бигерәк тә матди ауырлыҡтарҙы иҫәпкә алғанда) мөһим. Етемдәрҙең уңыштарына, ҡәнәғәт йәшәүҙәренә аҙмы-күпме мөнәсәбәте бар уның.

Һуңғы йылдарҙа беҙҙең республикала балаларҙы яҡлау, ғаилә һәм әсәлек инстинктын үҫтереү буйынса бик күп эштәр алып барыла. Был йәһәттән 2007 йыл ыңғай яңылыҡтар алып килде. Шуларҙың береһе - тәрбиәгә алынған баланы кейемһалым, аҙыҡ-түлек, уҡыу кәрәк-яраҡтары һ.б менән тәьмин итеү өсөн ай һайын 4 000-гә яҡын аҡса бүленә. Тик быға тиклем ата-әсә менән опека органдары араһында килешеү төҙөлөргә тейеш. Бала ҡараусыларҙың эш хаҡы берҙәм хеҙмәт ставкаһының туғыҙынсы разряды менән түләнә. Бөтә өҫтәмәләр менән иҫәпләгәндә дөйөм сумма 3200 һум тәшкил итә. Шулай уҡ бер тапҡыр бирелә торған пособие - 9 200 һум.

Патронат тәрбиәһендә бала юридик яҡтан балалар йортоноҡо, ә тәрбиәгә алыусы уның штаттағы хеҙмәткәре иҫәпләнә. Ҡабул итеп алыуҙан айырмалы, патронат ата-әсәнең хеҙмәт стажы бара. Бынан тыш ул ай һайын сығымдар хаҡында отчет бирергә һәм баланы махсус белгестәргә йөрөтөп, барыһы ла һәйбәт булыуы тураһында иҫбатларға тейеш.

Региональ мәғлүмәт банкында бөгөн ғаиләләргә таратып бирерлек өс меңгә яҡын етем бала иҫәпләнә.

Быйыл республика бюджетынан патронат тәрбиәгә 369 миллион һум аҡса бүленгән.

БР Мәғариф министры урынбаҫары Зөлфиә Әхмәтованың һүҙҙәренә ҡарағанда, хәҙер Башҡортостан Хөкүмәтендә "Етем балаларҙы торлаҡ менән тәьмин итеү тураһындағы положение" әҙерләнгән. Башҡортостанда торлаҡҡа мохтажлыҡ кисергән 490 етем бала иҫәпләнә. Үткән йылда Өфөлә 65 етем фатирлы булды ла инде.

**Светлана НАСЫРОВА әҙерләне.**

УҢЫШ ҠАҘАН

**Күптәр профессияны хыялдарға бай үҫмер сағында, йәғни ҡайһы бер нәмәләрҙе төшөнөп етмәгән йәшендә һайлауҫан. Бәлки уларҙың байтағы профессияны дөрөҫ тә һайлайҙыр, ләкин бәғзеләре йылдар үтә тора яңылышыуын аңлай.**

# ТӘҮӘККӘЛ АҘЫМ ЯҺА - уңырһың

Шуға күрә һөнәр һайлағанда ныҡлап уйларға кәрәк. Ни өсөн тигәндә, кеше ғүмере былай ҙа ҡыҫҡа һәм ул тәҡдиренә яҙылған ғүмерен көн һайын яратмаған эшкә килеп, үкенес кисереп үткәрергә тейеш түгел. Икенсенән, ул, моғайын, икенсе берәү хыял иткән урынды биләп ултыралыр әле. Ниндәйҙер ҡарарға килеүҙе һаман кисектергән кешенең үҙ-үҙенә ышанысы ла юғала башлаясаҡ. Ә бит күптәр тормошто бөтөнләй икенсе юҫыҡҡа үҙгәртергә бер ваҡытта ла һуң түгел, ти.

Яңылыш ҡабул ителгән ҡарар булмай, яйы сыҡҡан, йәғни уңайы тура килгән мәл була. Мәҫәлән, һиңә диңгеҙ буйына йәки тауҙарҙа ун көн ялға путевка тәҡдим итһәләр, саңғы шыуырға тауҙы һайланың, ти. Әммә ун көн буйы боҙлауыҡ яуыу сәбәпле, саңғы шыуып кинәнә алманың һәм "дөрөҫ ҡарар ҡабул итмәнем, диңгеҙгә барырға кәрәк булған", тип көйөндөң. Был дөрөҫ түгел, сөнки диңгеҙҙе һайлаһаң да, кинәнеп һыу инәһе урынға, бәлки, ниндәйҙер бәләгә тарып, ун көн буйы түшәктә ятырға тура килер ине. Бер нәмәне лә алдан күҙаллап, дөрөҫ кенә ҡарарға килеү мөмкин түгел. Ҡай саҡ үҙенән-үҙе яйға һалынып ҡуйғылаған мәсьәләләрҙе идеалға һанап, бәғзе берәүҙәр ниндәйҙер ҡарар ҡабул итер өсөн берҙән-бер альтернатива ҡалыуын көтөүсән. Ләкин был осраҡта улар хаталана. Шуның өсөн һөҙөмтәһе нисек булырына ҡарамаҫтан, ниндәйҙер ҡарарға килеүең яҡшыраҡ. Алдыңдағы ике юлдың береһен һайлап, төплө ҡарарға килеү һиңә көс бирәсәк һәм баш тартҡан юлыңдың да кемдәргәлер кәрәклеген аңлай белһәң, яратып һайлағаныңды тағы ла нығыраҡ ҡәҙерләйәсәкһең.

Тормошонда ҡулына ҙур фатирҙың һәм яҡшы машинаның асҡысын тотҡан кешенең пәйҙа булыуын күҙ алдыңа баҫтыр. Ул һинең матур фатирыңда йәшәй, көнө-төнө эшләп тапҡан өйҙәге бөтөн йыһаздарың менән файҙаланып, муллыҡта йәшәй, банктан алған аҡсаларыңдың иҫәп ҡағыҙҙарын теүәлләп бара, уларҙы контролдә тота, матур карауаттағы зауыҡлы яҫтыҡ-юрғандарыңа төрөнөп йоҡлай. Көҙгөгә ҡара әле - был бит һин үҙең. Тормошонда уңыш ҡаҙанған был кешене тәүәккәл ҡарарға килә белеүең ярҙамында үҙең булдырҙың. Үҙен-үҙе кәмһеткән кеше генә тәүәккәл аҙым яһауҙан ҡасып үҙен яҡларға маташа. Шуға күрә ҡай берәүҙәр күңеленә ятмаған шөғөлгә йәбешеп, ғүмере буйы эшенән бер ниндәй ҙә ҡәнәғәтлек кисермәй йәшәй. Ҡәтғи рәүештә ниндәйҙер юлды һайлаған кешеләр был тормошта нимә теләүҙәренә таянып эш иткәнгә уңыш яулай. Ундайҙар бөтөн нәмәне тиҙ генә ваҡытында хәл итеүсән, ә ҡалғандар, ни эшләптер, ашыҡмай, йә булмаһа, икеләнеп, бер ярҙан икенсеһенә ташланып, ғүмер үткәрә. Әгәр һин үҙең өсөн был тормошта нимә ҡәҙерле һәм ҡиммәтле икәнен яҡшы белһәң, уңышҡа өлгәшеү өсөн ҡарар ҡабул итеүе лә һәр саҡ еңел буласаҡ.

✓ *"Джентльмен булыу өсөн ни кәрәк?" тип һорағандар берәүҙән. "Был бик анһат: өс колледж тамамларға кәрәк". "Нисек, бер юлы өсәүҙеме?" "Юҡ, - бер колледжды - һин, икенсеһен - атайың, ә өсөнсөһөн олатайың тамамларға тейеш".*



*АФАРИН!*

# Әй һандуғасы

## моңдаштарын йыя

**Йыр сәнғәте донъяһына ягымлы тембрлы, тәбиғи тыйнаҡлыҡ, ниндәйҙер серле тәрән хис сағылған үҙенсәлекле моңо (лирик сопрано) менән килеп инде Гөлназ Ҡәҙербирҙина.**

Уның башҡарыуында "Төнгө серенада", "Йәш ғүмер", "Һыу буйынан әсәй ҡайтып килә", үҙе ижад иткән "Яңғыҙ аҡҡош", "Һағынмаһаң, әйҙә һағынма" тигән һәм башҡа бик күп лирик йырҙарҙа Мәсетле районының гүзәл тәбиғәте, сылтырап ҡына аҡҡан данлы Әй йылғаһы, һайрар ҡоштар менән тулған ҡуйы йәшел урмандары күҙ алдына баҫа. Сөнки Гөлназ халыҡтың йыр-моң хазиналарын күҙ ҡараһылай һаҡлаған ошо ырыҫлы төбәктә, Мәсетле районының йәмле Тайыш ауылында тыуып үҫкән. Бәләкәй генә сағынан сәхнәнән бер төшмәй концерттарҙа йырлап, бейеп, яҡташтарында ихтирам яулаған ҡыҙ, 1999 йылда беренсе тапҡыр Өфө сәхнәһендә фәлсәфәүи йөкмәткеле "Хат" йырын башҡарып, тәүге уңыш ҡаҙанды. Ҙур сәхнәгә тәү аяҡ баҫыуҙан уңыш яулау, йырға, сәнғәткә ғашиҡ ҡыҙҙың ижад ҡанаттарын нығытты. Ул илһамланып яңы йырҙар ижад итә башлай.

Башлыса үҙе ижад иткән һәм республикабыҙҙағы билдәле композиторҙарҙың лирик йырҙары тәшкил иткән репертуарын һуңғы ваҡытта "Томан", "Ғилмияза", "Саңды үҙәк" кеүек башҡорт халҡының боронғо йырҙары менән байытты.

- Яратҡан йырсыларым Сөләймән Абдуллин менән Азамат Тимеров башҡарыуында быуаттар төпкөлөнән килгән классик йырҙарыбыҙҙы тыңлаған һайын, халыҡ йырҙарын нығыраҡ ярата барам,- ти ул.

Гөлназдың ижадта уңыштары ла тос ҡына. 2000 йылда Башҡортостан радиоһы үткәргән "Хәтер" конкурсында лауреат булды. 2006 йылда "Ышанғылар килә мөғжизәгә" тигән



тәүге компакт-дискы донъя күрҙе. Әле "Моң" студияһында 12 йырҙан торған икенсе дискын сығарырға әҙерләнә. Рәтро йырҙарын яратыуының сере ниҙә икән? Ошо хаҡта һорағас, ул:

- Кешеләргә әйтер һүҙемде, уй-фекерҙәремде, хистәремде, тормошҡа, йәшәйешкә ҡарашымды тап шул йырҙар аша еткерә алам кеүек. Лирик йырҙар йәнеңде әҫәрләндергес илаһи көскә эйә. Улар күңелде сафландыра, рухты байыта. Ғөмүмән, әсәйҙәребеҙҙең йәш сағындағы популяр лирик йырҙар онотолорға тейеш түгел. Ул йырҙар йылдар үткән һайын сағыуыраҡ балҡыған аҫылташтай, үҙе бер рухи хазина,- тип яуапланы.

Гөлназ Ҡәҙербирҙина Өфө дәүләт сәнғәт академияһының башҡорт музыка факультетының фольклор бүлеген тамамлай. Ул әле Өфө педагогия колледжында уҡыта. Музыканан белем биреү менән бер рәттән, сәхнәнән дә айырылмай йырҙар ижад итә. Ижадта тәжрибә туплай, яңынан-яңы йырҙар менән репертуарын байыта.

Әйткәндәй... **3 апрелдә**, баш ҡалабыҙҙың Нефтселәр мәҙәниәт һарайында Гөлназ Ҡәҙербирҙинаның "Өҙөлөп көтә йөрәк яҙҙарҙы" тип исемләнгән тәүге ижад кисәһе буласаҡ. Тәүге ижад байрамында төп урынды башлыса Яҙ, Мөхәббәт, Матурлыҡ темаһы биләйәсәк. Театрлаштырылған тамашала билдәле йырсылар И.Ғәзиев, Р.Ғәлиев, В. Камалов, Р. Ғиззәтуллин, М. Шәйбәков, Ә. Нурғәлиев, Р. Шаһбалов, "Каруанһарай" фольклор-эстрада төркөмө сығыш яһаясаҡ.

**Римма ҒӘББӘСОВА.**

*СПОРТ! СПОРТ!*

# ӨМӨТ АҠЛАНМАНЫ

**Хоккей буйынса Рәсәй Чемпионатының плей-офф өлөшөндә "Салауат Юлаев" менән ЦСКА командалары сирек финалда осрашты. Ярым финалға сығыу өсөн һәр ике команданың береһе 3 тапҡыр еңергә тейеш.**

Көйәрмәндәр был ике команданың үҙ-ара алышыуы бик ҡаты, үтә көсөргәнешле буласағына шикләнмәне. Шулай булмай һуң! 32 тапҡыр ил чемпионы булған легендарь ЦСКА бит ул. Дөрөҫ, һуңғы йылдарҙа ул әллә ни алдыра алманы, уртаса командалар араһында булды. Әммә яңы тренер Вячеслав Быков килгәс (әйткәндәй, ул Рәсәйҙең йыйылма командаһының баш тренеры), команда матчтан матчҡа яҡшыраҡ уйнай башланы.

Эйе, уйындар бер ваҡытта ла булмағанса көсөргәнешле үтте. Өфөлә беренсе уйында юлаевсылар 5:2 иҫәбе менән еңде. Ә инде икенсе осрашыуҙа 1:3 иҫәбе менән еңелде.

Мәскәүҙә шундай уҡ хәл ҡабатланды, тиергә мөмкин. Тәүҙә "Салауат Юлаев" хоккейсылары отто. Шулай итеп, улар ике тапҡып еңеүгә өлгәште. Хәҙер иһә йәнә бер мәртәбә отоу кәрәк.

Ҡабаттан уйнағанда ЦСКА хоккейсылары 1:3 иҫәбе менән отто. Иҫәп: 2:2

5-се осрашыу йәнә Өфө майҙанында булды. Бында инде Мәскәү хоккейсылары көслөрәк булып сыҡты. Улар 3:1 иҫәбе менән еңде.

Башҡортостан көйәрмәндәре "Салауат Юлаев" командаһының ярым финалға сығыуын өмөт иткәйне. Тик өмөт аҡланманы.

Нишләйһең, спорт бит ул. Шулай ҙа юлаевсыларҙың был сезондағы уйыны яҡшы тәьҫир ҡалдырҙы. Уларҙың уйын сифатының бермә-бер яҡшырыуы бәхәсһеҙ. Тимәк, киләһе сезонда юлаевсылар тағы ла яҡшыраҡ уйнар, тип ышанғы килә.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

*КЕМ АЛЫҠ?*

# Яуап һеҙҙән, билет беҙҙән

**6-7 апрель Башҡорт дәүләт филармонияһында Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Артур Туҡтағолов үҙенең ижад кисәһен үткәрә.**

"Йырҙарым йәшәүгә дәрт бирһен!" исемле концерт программаһында Фәрит Бикбулатов, Нәзифә Ҡадирова, Миңзифа Исҡужина, Вәлит Илембәтов, Радик Вәлмөхәмәтов, Гөлсөм Бикбулатова, Әлим Ҡәйүмов, Нәркәс Сиражетдинова, Сәғиҙулла Байегет, Марсель Ҡотоев, Татарстан ҡунаҡтары Нәфҡәт Ниғмәтуллин, Зөлфиә һәм Йәүит Шакировтар, "Каруанһарай", "Ант", "Тархан", "Евразия" төркөмдәре, "Гранде" ритм-балеты һәм Стәрлетамаҡ бейеү ансамбле ҡатнаша.

Һеҙгә йырсы хаҡында һорауҙар тәҡдим итәбеҙ. Уларға яуап биреп, Артур Туҡтағоловтың дәртле йырҙары, наҙ, һағыш һәм һөйөү тулы моңдары менән һуғарылған күңелле кисәгә саҡырыу ҡағыҙы ота алаһығыҙ.

1. Йырсының тыуған яғы?
2. А. Туҡтағолов ниндәй төркөмгә нигеҙ һалыусыларҙың береһе
3. "Далан" төркөмө ҡасан ойоштороло?
4. А. Туҡтағоловтың популяр йырҙарын һанап сығығыҙ?
5. А. Туҡтағолов ниндәй музыка ҡоралында уйнай белә?

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

### Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында

Башҡортостандың театр мәҙәниәте тарихи ваҡиға алдында тора: 20 апрелдән 26-на ҡәҙәр Рәсәйҙең Михаил Щепкин исемендәге юғары театр училищеһының башҡорт студияһын тамамлаусылар үҙҙәренең диплом эштәрен күрһәтәсәк!

Ете көн барасаҡ "Йәштәр ижады аҙналығы"нда тамашасы студенттарҙың алты спектаклен: "Ванюшин балалары" (С. Найденов), "Шоколад һалдат" (Б. Шоу), "Гусар ҡыҙ" (Ф. Кони), "Дон Жуан" (Ж. Мольер), "Кәләш алыу мажаралары" (Д. Ленский), "Биш кис" (А. Володин) һәм "Һаумы, туған сәхнә" тигән театрлаштырылған концертын ҡарай ала. Студияның художество етәксеһе - профессор Владимир Селезнев.

*АҠЫЛ – ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЗАРЛАНАҺЫҢМЫ?

## Тимәк, хаҡлы түгелһең

- Тәүҙә ғәҙеллек эҙләйһең, һуңынан - башҡа эш урыны.
**(Петр Таранов).**

- Ҙур ағастар башҡаларҙы күләгәһендә йәшерә, ә үҙе ҡояш аҫтында ҡала.
**(Һинд аҡылы).**

- Һин зарланаһыңмы? Тимәк, һин хаҡлы түгел.
**(Анатолий Злобин).**

- Оптимист һәр ерҙә - йәшел, пессимист ҡыҙыл төҫ күрә. Аҡыллы дальтоник булыуҙы хуплай.
**(Япон аҡылы).**

- Ҡытай медицинаһы, Европаныҡынан айырмалы, сирҙе түгел, ә кешене дауалай.
**(Бер врачтың әйткәне).**

- Ишәкте ҡыйыҡҡа мендергәнгә тиклем уны нисек төшөрөүең тураһында уйла.
**(Көнсығыш аҡылы).**

- Йәшен бейек ағасты ата.
**(Әйтем).**

- Шәхси тәжрибә менән һаҡ булыу кәрәк: бер тапҡыр эҫе плитәгә ултырған бесәй уға ҡабат ултырмаҫ, шулай уҡ һыуығына ла.
**(Әйтем).**

- Үс ала башлар алдынан һин ике ҡәбер ҡаҙып ҡуйырға тейешһең.
**(Ҡытай мәҡәле).**

- Башҡалар хата яһамаһа, мин үҙемдең хаҡлы икәнемде ҡайҙан белер инем?
**(Петр Таранов).**

- Аҡланырға теләп, үҙ бәләләремде яуыз яҙмышҡа япһарам икән, тимәк, мин үҙемде яуыз яҙмышҡа буйһондорам. Әгәр ҙә бәләләрем өсөн бар яуаплылыҡты үҙ өҫтөмә алһам, тимәк, мин үҙемә кешеләрсә йәшәү мөмкинлеге яулайым.
**(Антуан де Сент-Экзюпери).**

- Стакан менән нығытылған дуҫлыҡ күпселектә быялалай була.
**(Билдәһеҙ автор).**

- Икәү бәхәсләшкәндә өсөнсө кеше мотлаҡ шатлана.
**(Сенека).**

- Тормош уйын кеүек: берәүҙәр унда ярышырға, икенселәр һатыулашырға, ә иң бәхетлеләр ҡарарға килә.
**(Пифагор).**

- Яраҡлашып, кешеләр үҙ-үҙен һаҡлап ҡалырға теләй, ысынында үҙ-үҙен юғалта.
**(Михаил Пришвин).**

- Һәр ым-ишарамды ҡабатлаған дуҫ кәрәкмәй миңә, быны минең күләгәм дә яҡшы башҡара.
**(Плутарх).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Джентльмен булыу өсөн ни кәрәк?" тип һорағандар берәүҙән. "Был бик анһат: өс колледж тамамларға кәрәк", тип яуап биргән тегеһе. "Нисек, бер юлы өсәүҙеме?" "Юҡ, - тигән аҡыллы кеше, - бер колледжды - һин, икенсеһен - һинең атайың, ә өсөнсөһөн олатайың тамамларға тейеш".**

**«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:**
Өфө ҡала округы Советы һәм хакимиәте
«Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһы
**Баш мөхәррире:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.
**Мөхәрририәт:** Вячеслав ГОЛОВ, Әхмәр ҮТӘБАЙ, Радик ӨМӨТҠУЖИН, Рәлиә БИКТИМЕРОВА

**Телефондар: 253-25-44; 252-39-99.**
E-mail: kiskeufa@ufacom.ru
«Киске Өфө»нөң индексы – 50665.

Гәзит РФ Матбуғат эштәре, телерадиотапшырыуҙар һәм киң информация саралары министрлығының Волга буйы төбәк-ара территориаль идарағында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №7 –1675.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте, **253-25-44, 272-89-09, 273-35-92** телефондары буйынса, «Вечерняя Уфа», «Уфимская неделя» һәм «Киске Өфө» гәзиттәренә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә **253-25-44** телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды,
(450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

Тиражы - 6029
Заказ 1458